

*Барый НОҒОМАНОВ*

# ҒҮМЕРҘӘР БАЛҠЫШЫ

*Роман*

## Мөхәмәтзакир

Майкамал менән Мөхәмәтшакирҙың икенсе улдары — Мөхәмәтзакир баҫалҡылығы менән айырылды. Бәләкәйҙән үк атҡа әүәҫ булды. Йоҡонан күҙен тырнап аса ла ат һарайына йүгерә, төнгәсә шунда урала. Ҡамыт кейҙерергә буйы етер-етмәҫтән, ат менән бәйле эштәргә йөрөй башланы. «Ат ене ҡағылған», тип тә атап бөттө инде үҙен ата-әсәһе, быға ул ыжламаны ла, киреһенсә, маһайыр ғына ине. Йомош-юлға һә тигәнсә ҡанат елпегән малай ине ул: һыбай ҙа сабып сығып китә, арбасанаға ултырып та елдерә.

Колхоз ойошторолғас, Мөхәмәтшакир атын дөйөм хужалыҡҡа тапшырҙы. Шул ваҡытта Мөхәмәтзакир үтә лә өҙгөләнде.

— Бирмә атты, атай, тере ҡулһыҙ итәһең бит беҙҙе, — тип үртәлде улы.

Мөхәмәтшакир ете үлсәп бер киҫә, әммә бер һүҙҙе ике тапҡыр һөйләр кеше түгел, ҡарарын һис кирегә үҙгәртмәҫ.

— Яңғыҙаҡ — юлдан яҙыр, берлектә — тереклек,— тип кенә яуапланы ныҡыш Мөхәмәтзакирға.

Ошонан һуң Закирға ни ҡала инде, атын етәкләп барған атаһы артынан эйәрҙе. Йөҙө һытылып, илар сиккә етте хатта. «Барыбер урлап ҡасасаҡмын атымды», — тип һөйләнде эстән генә. Шунда уҡ күңелендә икенсе һорау тыуҙы: ә ҡайҙа ҡасып була икән һуң? БыҒаса ауылдан бер ҡайҙа ла сыҡманы, сит-ят яҡтарҙа таныш-белеше юҡ, ҡараҡ рәүешендә ҡара урман, тау-таш араһында йөрөр инең дә, бөтә нәҫел-нәсәбенең йөҙөн ҡараға буяу буласаҡ. Баш ватты, ләкин уйының осон төйнәй алманы. Ул шымармаған таш ине әле.

Мөхәмәтшакир ағайҙың өсөнсө улы Ғәйнелғилем бригадир ине. Атаһын күргәс, ҡыуанып китте.

— Һин дә колхозға ингәс, башҡалар өсөн ҙур өлгө, — тип ҡаршыланы улы.

Ғәйнел коммунистарҙың ячейкаһына тәүгеләрҙән ингәйне, башта артель, унан колхоз ойоштороуҙа ҡатнашты. Йәш коммунисҡа бригадирлыҡ эшен йөкмәттеләр. Атаһын да колхозға ҡушылырға ул өндәне.

— Бер нисә ат йыйылды инде, тик уларҙы нисек аҫырарға? Ат ҡарарлыҡ бөтмөр генә бер-ике егет кәрәк ине. — Үҙ хәстәрен белгертте улы атаһына.

— Мин, — тип һалмаһынмы шунда Мөхәмәтзакир, — мине ҡуйһындар.

Ғәйнел атаһына ҡараш ташланы.

— Нисек уйлайһың, атай?

— Үҙең беләһең, ат тиһәң — атлығып тора инде ул.

— Ғәме барҙың — йәме бар, тәүәккәлләйек һуң Закир ағайымды.

Шул көндән алып Мөхәмәтзакир ат һарайынан ҡайта белмәне. Малҡайҙарҙы ғына тәрбиәләп ҡалманы, әлегә ҡура итеп файҙаланылған иҫке синнекте лә ҡулынан килгәнсә ҡаҡҡылап-һуҡҡылап ҡуйҙы. Сбруйҙарҙы, арба, саналарҙы йүнгә килтереүҙе төп бурысҡа һананы. Септә һуғырға ла оҫтарҙы, ҡышын юл йөрөп, тирләп ҡайтҡан аттар өсөн бик кәрәк буласаҡ ул.

Аттар ишәйә торҙо. Хужалыҡҡа ойошоусылар синнек тирәһен иркен генә итеп кәртәләп, ялан ҡура яһанылар. Алдан уҡ һалам, бесән килтереп өйөр урын да әҙерләнде. Сбруйҙар ҡуйырға йорт та һалып ҡуйҙылар. Теләһә ҡайҙа туҙышып ятырға тейеш түгел дәһә улар, иҫәпле, бөтәһе лә рәтле, һәр атҡа үҙенә яраҡлы сбруй кәрәк. Бына шуларҙың барыһы ат ҡараусыға, быны ндағы халыҡтың теле менән әйткәндә — конюхҡа йөкмәтелгән.

Бригадир ҙа ике атлап бер баҫҡан һайын ошонда һуғыла. Ултырып эшләр урыны уның — әлеге сбруйҙар һаҡлаған өй. Йомоштары төшһә, ошонда киләләр. Кеше өҙөлмәҫ төйәккә әйләнде китте элекке байҙың синнеге. Халыҡ менән аралашыу конюхҡа ла күңелле.

Ғәйнел, үҙенең ярҙамсыһы күреп, бар эштә Закир ағаһы менән кәңәшләшә.

— Яңғыҙыңа эш ауырлашты, ағай, иптәш табыр инең үҙеңә, — тине бер көн. — Ҡараштыр әле, килергә теләүселәр булмаҫмы?

— Табылыр. Һап итеп тороусылар бар.

— Егәрлеһен ҡара инде, егет булһа, мут булһын, ике күҙе ут булһын, тигәндәй.

— Миңлебай ағайҙың улы Аҫылбай күптәнән бирле, ошонда мин дә эшләһәм ине, тип теш төшөрә.

— Бына бит, эҙләгәнде табабыҙ түгелме? — тип йөҙө асылды Ғәйнелдең. — Һин ни яуап бирҙең һуң?

— Һөйләшермен, тинем...

— Һөйләштек, улайһа. Атаһы ла, улы ла һәйбәт икәнен яҡшы беләм. Саҡыр бөгөн үк.

Аҫылбай килгәс, эш тағы ла уңға тәгәрәне. Бригадир Мөхәмәтзакирҙы өлкән конюх итеп үрләтте. Егеттәр быға көлөштө генә.

— Беҙ икебеҙ ҙә бер йәштә, оло ла, кесе лә түгел.

— Шулайлыҡҡа шулайҙыр ҙа, кемдер берегеҙ ошондағы бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға тейеш, — тип аңлатты Ғәйнелғилем. — Берберберхәл килеп сыҡһа, кемдән һорайҙар — юғарыраҡ поста торғанынан.

Бригадирҙың был һүҙе өркөтмәне егеттәрҙе.

— Беҙ ул-был хәлгә еткермәбеҙ, — тиештеләр.

Бер ҡалыптан һуғылмаған бит, ауылда ла төрлө кеше бар: берәүһе шаталаҡ, берәүһе өҙгөс, кемдер үҙенә ҡайырыуҙы ҡарай. Колхоз ойошҡан мәлдәрҙә шундайҙар күбәйеп тә китте. Үҙемдең өлөшөм бар, үҙем биргән мал, тигәндәр ҙә осраштырғылай. Егет ҡорона еткән Хәйрүш тә шундайыраҡ ине: һис ваҡытҡа ҡарамай, килә лә ат таптыра. Ҡышҡы оҙон төндәрҙең береһендә ғәйеп булды бит Хәйрүштең атаһы биргән сапҡын йәш тай. Ул мәлдәрҙә ҡарауылсы-фәлән ҡуйылмағайны ат һарайына. Әле күмәк хужалыҡ итеүҙең бөтә нескәлектәренә лә төшөнөп бөтөлмәгәйне. Ике конюхтың өҫтөндә барыһы ла: көндөҙ ҙә ошонда, төнгөлөккә лә алмашлап киләләр. Ул көндө Мөхәмәтзакир ҡалырға тейеш ине ҡарауылда. Ҡалды, ләкин кискелеккә сәй эсергә ҡайтты. Әйләнеп килһә, синнек ҡапҡаһы асыҡ, аттар ялан ҡураға таралған.

Мөхәмәтзакир шунда уҡ аттарҙы синнек эсенә ҡыуаланы. Үҙе шөбһәләнә — кем асып киткән ҡапҡаны, берәй үсле кеше бармы? Егет ошонда килеп йөрөгән кешеләрҙе башынан үткәрҙе. Берәүгә лә ҡаты бәрелгәне булмағайны шай. Аттарҙы барлап сыҡты — берәүгә кәм. Хәйрүштәрҙең йылҡылдаҡ тайы юҡ табаһа!..

Мөхәмәтзакир шунда уҡ Хәйрүштәргә йүгерҙе. Юл ыңғайында Аҫылбайҙарға инеп, ашыға-сәсәй хәлде аңлатты. Үтенеп һораны:

— Һин, дуҫҡайым, ат һарайына бара тор әле, мин әйләнеп килгәнсе.

Дуҫы, һүҙ ҙә өндәшмәй, йыйына башланы. Мөхәмәтзакир ары сапты. Хәйрүш өйөндә булмай сыҡты.

— Ҡайҙа китте икән, белмәйһегеҙме?

Атаһы асыулана төштө:

— Әзмәүерҙәй егет өйҙә ятырға ни, бестерелгән кәзә тәкәһе түгел, — тип кенә һалды.

— Әйтмәне ләме?

— Әйтмәне лә... Бала-сағалыҡтан күптән сыҡҡан инде ул.

Бында төпсөнөп ултырыуҙың файҙаһы юҡлығын төшөнөп, урамға сыҡты ат ҡараусы. Күрше-тирәләренән дә һорашты, береһе лә күрмәгән дә, белмәгән дә. Аптырағас, ҡустыһы Ғәйнелғилемгә әйтергә булды. Бригадир йәһәт кенә кейенә башланы.

Ат һарайында өс егет нишләргә тип баш ватты. Милиция саҡыртыр инең, район үҙәгенә барып ҡайтҡансы сәғәтләп ваҡыт үтә. Башҡаса бер нисек тә хәбәр бирермен тимә.

Бер тышҡа сығып, бер өйгә инеп, өсәүләп тәрән хафаға төшөп төн үткәрҙеләр. Таң яҡтыһы һыҙыла башлаған мәлдә, йән-фарман сабып килгән һыбайлы күренде. Яҡынлашҡанын ҡапҡа бағанаһына ышыҡла-

нып һағалап торҙолар. Килеп етеү менән ат башынан эләктереп, бәреп тә төшөрҙөләр һыбайлыны.

— Хәйрүш, һинме?

— Мин... — Егет тә шыр ебәрҙе, буғай, теле көрмәлде.

Меҫкен аҡһыл бурыл, быуаҡ-быуаҡ тиргә батып, ҡарайған да ҡуйған. Ауыр-ауыр тын алып, ҡалтырана. Күренеп тора: былай ҙа ҡыҙыу тай эшлектән сығып ярһыған. Өҫтөнә ҡат-ҡат септә ябып, малҡайҙы һарайға индерҙеләр. Хәйрүште өйгә һөйрәкләнеләр.

— Ниңә һорамай алып киттең атты? — Бригадир ҡыҫа ғына тегене.

— Үҙебеҙҙең атты ниңә һорап торайым мин! — Һауалы ғына яуаплай егет.

— Ҡайҙа йөрөнөң быға саҡлы?

— Уныһы минең эш. — Теле сарланды быныӊ.

— Бурлыҡ бит был!.. Ат урлау тип атала.

— Бурлыҡ, имеш. Үҙ бүркемде үҙем урлаған шикеллеме?

— Хужалыҡ малын урлаған кеүек... Хәҙер ул һеҙҙең шәхси малығыҙ түгел инде, колхоздыҡы. Уғырылыҡ өсөн яуапҡа тарттыралар, беләһеңдер.

— Мин һораманым да, урламаным да. Ана бит, кире килтерҙем.

Телләшә, ғауғалаша, тамам яҡтырғас ҡына ҡайтарып ебәрҙеләр Хәйрүште. Уны оҙатҡас, Ғәйнелғилем, борсолоуын баҫа алмай, ағаһына өндәште.

— Күҙ-ҡолаҡ булып кер әле, ни хәлдә икән бурыл?

Конюх шунда уҡ синнеккә йүгерҙе. Инһә, тай, меҫкен, аяҡтарын һоноп ятҡан, ауыҙынан аҡ күбек аға. Ҡото осто егеттең, тиҙерәк хәбәр итергә ашыҡты. Аттың хәле ҡалмаған, аяғына баҫтырырға маташһалар ҙа, тора алманы.

— Янған бит был мәхлүк, оҙон юл сабып үткәндер, ахырыһы, — тип фаразланы Ғәйнелғилем.

— Нишләйбеҙ инде хәҙер? — Ат тирәләй ыуаланды ғына Мөхәмәтзакир.

— Өҫтөнә тағы өҫтәп ябыр әйбер кәрәк, йылына төшөр, бәлки.

Бишмәт, балаҫ япҡас, тай тынысланғанға оҡшаны. Аһ, был алдаҡ тынысланыуы ғына булған икән шул — ике сәғәттән тайҙың тын алышы өҙөлдө.

Был хәл тураһында хәбәр бөтә ауылға таралды. Район милицияһына ла мәғлүм булды. Хәйрүште колхоз идараһы йортона килтерҙеләр. Бригадирҙы ла, өлкән конюх булараҡ, Мөхәмәтзакирҙы ла саҡырҙылар. Һорай башланылар Хәйрүштән: ҡайҙа барҙың, нишләп йөрөнөң? Алдашмай ғына һөйлә барыһын да, тинеләр.

Хәйрүштең теле сиселде. Нишләһен, ҡыҫҡыска ҡыҫылғанын һиҙҙе.

— Минең Баҡсалыла йәрәшкән ҡыҙым бар. Өйләнешергә һөйләшеп йөрөйбөҙ, — тине оялып ҡына.

— Уныһы яраған, һөймәлекле йәрһеҙ ҡалмаҫ... Ниңә һорамай алып киттең һуң атты?

— Алдым шул, үҙебеҙҙеке булғас... Һораһам, бирмәҫтәр ине, ҡыҙ менән осрашыу өсөн ат тотмайбыҙ, тиерҙәр ине.

— Йә, алып та киткәнһең ти, ниңә шул саҡлы ҡыуырға инде, ат күрмәгән кешеһеңме ни?

Йомшарҙы егет, ылбырап төшә бара.

— Һөйләшә торғас, һуңлап киткәнмен, яҡтырғансы ҡайтып етәйем тип ҡыуаланым.

— Енәйәт эшләгәнеңде таныйһыңмы инде: атты урлағанһың, атты һәләк иткәнһең, — тип бөрә тегене тикшереүсе милиционер.

— Юҡ, урламаным. Урлаған кеше кире ҡайтармай ул. — Әле генә мөштәйгән Хәйрүш, ҡапыл батырайып, һаман үҙенекен тылҡыны. — Мин үлгән ат килтермәнем, ана, ҡабул итеп алыусылары бында ултыра, һорағыҙ уларҙан.

— Үҙең үк ғәйебеңде асып бирҙең бит, шәп ҡыуҙым, тинең. Шул арҡала харап булған ат. — Тикшереүсе егеттең һүҙен үҙенә ҡайтарғас, йомдо ауыҙын теге.

Хәйрүште район үҙәгенә алып киттеләр. Уны хөкөмгә тарттырасаҡтарын иғлан иттеләр. Егеттең ата-әсәһе бөгөлөп төштө.

— Әрәм итмәгеҙ берҙән-бер балабыҙҙы, күҙ терәп торған ҡараусыбыҙ бит ул, — тип үрһәләнде әсәһе, мөлдөрәтеп күҙ йәштәрен ағыҙҙы.

— Ни һораһағыҙ шуны бирәбеҙ, ҡотҡарығыҙ улымды! — Инәлепялбарҙы атай кеше.

— Уныһы беҙҙең эш түгел, хөкөмдарҙар ҡулына күсә ул хәҙер. — Тикшереүсе үҙ юлында булды.

Колхоз рәйесе ипле, рәхимле кеше ине. Хәйрүштең ата-әсәһе уның мәрхәмәтлелегенә бағланып, алдына барып йығылды.

— Бер үк әрәм итә күрмәгеҙ инде улыбыҙҙы, ул кәләшле, беҙ киленле булабыҙ тип йөрөгәндә, хыялын ҡыймағыҙ, бәхетен өҙмәгеҙ Хоҙай хаҡына!

Сәхәбетдинов уйға батты бер ара, ҡыҙғанып ҡараны ата-әсәгә.

— Үҙем генә хәл итә алмайым шул, — тине.

— Ат урынына һыйырыбыҙҙы бирәбеҙ бөгөндән, Сәхәбетдинов иптәш, — түбәнселек менән баш эйҙе атай кеше. — Бик һөтлө, ферма өсөн хазинаның хазинаһы...

— Быҙауы менән алырһығыҙ, тик ҡотҡарығыҙ ғына, — тип өҫтәне әсәһе.

Йәлләне, әлбиттә, колхоз рәйесе. Күпте күргән кеше бит, граждандар һуғышында күпме айҡашҡан, ярлы-ябағайға ер биреү өсөн дә көс түккән. Атай-әсәй хәсрәтен дә яҡшы белә, үҙ башынан үткән. Аҡтар бер гонаһһыҙ улын ҡаралап, ғәйеп тағып, атып китеүҙәрен онота буламы?!.

— Йәгеҙ, бәрелеп-һуғылмағыҙ ул саҡлы. — Хатта ҡосаҡлап уҡ алды тегеләрҙе. — Юлын эҙләрбеҙ. Идара ағзалары менән һөйләшеп, бер ҡарарға килербеҙ.

Шул көндө үк идара ағзаларын йыйҙы.

— Колхозыбыҙҙа эшкә егелергә әҙер ир-ат артып ятмай әле. Былай матур ғына эшләп йөрөгән егет ине бит Хәйрүш. Ата-әсәһе ат урынына

һыйыр тапшырабыҙ ти. Әллә шуға ризалашайыҡмы? Кешене юҡҡа сығарыу тиҙ ул, һаҡлап ҡалыу ҡыйын. — Яйлап, уратып аңлатты идара рәйесе.

Башҡалар ҙа уны хупланы.

— Мал башына — мал. Әрәм итмәйек егетте. Һеҙҙең тәкдимде яҡлап сығайыҡ.

Сәхәбетдинов районға юлланды. Етәкселәр менән һөйләште, судьяға ла аңлатып, колхоз идараһы ағзаларының ҡарарын тотторҙо. Уныһы:

— Хөкөм ваҡытында был ҡарарҙы иҫәпкә алырбыҙ, — тип кенә ҡуйҙы.

Хөкөм Хәйрүш файҙаһына үтте: уны һыйыр биреп ҡотҡарҙылар. Бына бит, ат ҡараусы ғына тиһәң дә, Мөхәмәтзакир ниндәй генә ваҡиғаларға тарыманы, яҡшыһын да, яманын да күрҙе.

Мөхәмәтзакирҙың да күңел баҡсаһында ғишыҡ ҡошо тауыш бирә башланы көтмәгәндә. Ул заманда ҡыҙҙар яҡын туғандары йәшәгән ауылдарға ултырмаға йөрөй торғайны. Үҙҙәре лә аңламаҫлыҡ хистәр тулҡынын баҫыу өсөнмө ул, әллә көнгә баҡҡан көнбағыштай йылмайып, йәр йәрәшер егет осрауын өмөт итепме, Кәпәй-Ҡобауға ла ҡыҙҙар килгеләне. Шундайҙарҙың береһе менән Мөхәмәтзакир уйламағанда осрашты. Өлкән еңгәһен тимер юл станцияһына илтә барғайны. Бер юлы кибеткә инеп, өйгә сәй-шәкәр ҙә алып ҡайтыр. Йомошон йомошлап, ауыл юлына кире әйләнде. Ҡышҡы баҫыу-ялан өҫтөндә елбәҙәк ҡар балҡыш уйнатҡан саҡ. Килә һоҡланып, ҡабаланмай ғына атын юрттырып. Алда юл бирәм тип ситкә тайпылған бер ҡыҙ бот төбөнә саҡлы ҡарға батты. Ниндәй йән менән үтһен егет кеше, дилбегәһен тартты ла санаһынан һикереп төштө.

— Ғәфү ит инде, һылыу, күрмәй ҡалғанмын, — тип беләгенән тотто, ярҙамлашып, ҡыҙҙы көрттән сығарҙы.

Ҡыҙ быға ҡараған да көлә генә:

— Борсолмағыҙ, һеҙ ғәйепле түгел, күрһәгеҙ ҙә, юл тар булғас ни...

— Күрһәм, туҡтап, ҡарға батырмай ғына санаға ултыртыр инем дә ул.

— Һы, шулай уҡмы? — Тағы ла иғтибарлап ҡараны егеткә.

Күҙҙәр осрашты. Ҡыҙҙың ҡарашында ниндәйҙер моңға уралған нур бар кеүек тойолдо Мөхәмәтзакирға. Һағышлы ла, яғымлы ла, күңел елкетерлек.

— Ҡайҙа бараһығыҙ, сер булмаһа?

— Кәпәй-Ҡобауға.

— Кәпәй-Ҡобауға?!. Юлыбыҙ бер икән дә беҙҙең. — Ҡыуаныс хистәре бәреп сыҡты. — Ултырығыҙ, һылыу, мин дә шунда ҡайтам даһа!

Төйөнсөгөн алып, үҙе үк йәтешләп ултыртты егет.

— Кемгә бараһығыҙ унда?

— Зәйтүнгөл апайҙарыма.

— Бәй, улар бит беҙҙең урамда йәшәй. Йылт итеп кенә ҡапҡа алдарына илтеп төшөрөрмөн.

— Хатта ҡапҡа төбөнә үк? — Һабантурғай тауышы менән йәнә көлөп ҡуйҙы ҡыҙ.

Һүҙ артынан һүҙ китте. Исемен һорарға ла баҙнат ҡылды егет.

— Исемем Шәмсийыһан булыр.

— Алыҫтан киләһегеҙме инде?

— Алыҫ та, алыҫ та түгел, Туймазы яғынан.

— Яҡынлығы ла, алыҫлығы ла бер ни тормай теләгән кешегә, — тип өҫтәне егет.

— Һеҙҙең дә исем-шәрифегеҙ барҙыр, моғайын.

— Бар, әлбиттә, миңә Мөхәмәтзакир тип ҡушҡандар.

— У-у, һеҙҙең дә ҡуш исем икән. Ҡуш исемлеләр оҙаҡ йәшәй, тиҙәр.

— Һеҙ ҙә ғүмерле булырһығыҙ, улайһа, — тине лә, өҫтәп ҡуйҙы егет: — икебеҙ ҙә...

Һөйләшә-һөйләшә, ҡайтып еткәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалды былар. Ауылға инәрәк, бар ҡыйыулығын йыйып, тағы ла өндәште Мөхәмәтзакир:

— Һеҙҙең менән осрашырға мөмкинме тағы ла?

Ҡыҙ ҡыҙарҙы, әммә яуапһыҙ ҡалманы:

— Тау менән тау ғына осрашмай ул.

— Кисен ҡапҡағыҙ төбөнә килһәм, сығырһығыҙ микән?

— Әлләсе... Килгәнегеҙҙе белһәм әгәр... Изгелеккә — игелек. Изгелектең иртәһе-кисе юҡ.

— Улайһа, ҡалай итеп осрашырбыҙ икән?

— Ҡалайлап тормай ғына... Үҙең уйла инде ҡалғанын.

— Ы-ы... Алай икән, — уйланды Мөхәмәтзакир. — Ҡараңғы төшөп, күҙ бәйләнгән саҡта өйөгөҙ тапҡырында әсе генә бер һыҙғырып ебәрһәм нишләр?

— Килгәнеңде танырмын да, ҡаршы сығып алырмын, — тине лә, тағы ла моңло көлөп, ҡапҡанан инеп юғалды ҡыҙ.

Һүҙ эҙләп кеҫәгә керә торғандарҙан түгел икән был, ҡыйыу күренә. Сығыр микән, юҡ микән? Ошо хаҡта уйлана-уйлана, талсығып кисте көттө Мөхәмәтзакир.

Хәйрүш менән булған хәлдән һуң ат һарайына төнгө ҡарауылсы тәғәйенләнеләр. Ҡарауылсы йөкмәтелгән бурысҡа етди ҡараған, эшкә ваҡытында, хатта бер аҙға иртәрәк тә йөрөгән, ни ҡушһаң — шуны еренә еткереп үтәгән ағай ине. Ул аяҡ баҫыу менән нимәгә иғтибар итергә аңлатмалар биреп, өйөнә ҡабаланды Закир. Өйҙә лә тиҙ генә тамаҡ ялғап, ашыға-ашыға арыу кейемдәрен кейгәнен Майкамал апай ҙа шәйләне.

— Ял итәһе урынға, ҡайҙа өтәләнәһең улай? — тигән әсә тауышын ғына ишетеп ҡалды егет, урамға йүгерҙе.

Шулай итмәй, ҡараңғылыҡ пәрҙәһе ерҙе ҡаплап, һиллек урынлашып та өлгөргән дәһә! Бер үтте ҡунаҡ ҡыҙ төшкән өй тапҡырынан, икенсегә әйләнде. Өсөнсөһөндә, аттарҙы өйөргәндәге һымаҡ, әсе итеп һыҙғырып ебәрҙе. Үҙе ҡапҡа бағанаһына ышыҡланды. Көтә — юҡ, ишек тә асыл-

май, ҡар ҙа шығырламай. Көтә-көтә күҙе аҡайҙы егеттең. Өмөт өҙөп, ҡайтырғамы тип икеләнгәндә, ишек асылып-ябылыуы ишетелде. Унан ҡапҡа асылды. Тып итеп ҡыҙ алдына баҫты Мөхәмәтзакир.

— Оҙаҡ көттөрҙөммө әллә? — тине Шәмсийыһан, уңайһыҙланғандай. — Шунда уҡ сығырға тартындым, һыҙғырыуыңды өйҙәгеләр ҙә ишетеп ҡалды, буғай.

— Нисауа, зыян юҡ, көткән эш хәйерле тамамлана ул. — Егет тә матур ғына яуап таба белде.

Бер ара әңгәмәләшеп алғандан һуң, Шәмсийыһан инеп китергә ашыҡты.

— Ҡуй, оҙаҡламайыҡ тәүге килгән кистә үк.

— Иртәгә нисек осрашырбыҙ?

— Иртәгә лә бөгөнгө кеүек.

Егет, осоноп, аяғы ергә теймәй атланы өйөнә.

Икенсе көндө лә шундай уҡ хәл ҡабатланды. Тәмләп кенә һөйләшкәндә, шыпырт Зәйтүнгөл килде лә сыҡты ҡапҡанан.

— Бына һыҙғырыуҙың сихыры ҡайҙа икән? — Серле ҡараны ул.

— Ошо егет инде мине ултыртып алып килгән, — тип, аҡландымы, әллә уңайһыҙ хәлдән ҡотолорға тырыштымы Шәмсийыһан.

Зәйтүнгөл битәрләргә уйламаны ла, киреһенсә, маҡтап, хуплап ебәрҙе.

— Рәхмәт, һеңлемде килтергәнеңә! Кеше һүҙен йыға торған егет түгел ул беҙҙең Мөхәмәтзакир. Нәҫелдәре менән ярҙамсылдар.

— Ҡуй әле, Зәйтүнгөл апай, ул саҡлы маҡтамасы, — тине егет, бер аҙ ҡаушап.

— Булмышығыҙҙы бөтә ауыл белә. — Үҫтерҙе лә ебәрҙе Зәйтүнгөл егетте.

Шәмсийыһан да, йөҙө асылып, йылмайҙы.

Урыҡ-һурыҡ осрашып, аҙна үтте. Шәмсийыһан ҡайтырға йыйынды. Сәбәбен табып, Закир уны оҙата барҙы станцияға. Артабан ҡыҙ поезд менән китәсәк.

Вокзалда хәтһеҙ генә көттөләр поезды. Һыйынып ҡына йәнәш ултырҙылар. Бер-береһенең ҡулдарын тотошоп ҡыҫыштылар. Ус ҡыҫышыу йылыһы тәнгә таралып, ләззәт ағышына күмде. Тартыныу ҡоршауҙары өҙөлә барҙы әкренләп.

— Хат яҙырһыңмы һуң, Шәмсийыһан?

— Үҙеңдекен алғас, яҙырмын.

— Мин бөгөн үк яҙып ебәрәм әләйгәс.

— Бөгөн үк тимәгән, ҡасан да көтөрмөн.

— Ағайым менән бер-бер сәбәбен табып барып та сығырбыҙ әле.

— Килегеҙ. Минең атайым кешегә һәйбәт ул. Тик ҡасан килерегеҙҙе әйтеп, башта хат ебәрерһең.

— Вәғәҙә. Килербеҙ.

Поезд күренеп, уларҙың әңгәмәһен бүлде. Ҡыҙ тәҙрәнән ҡул болғай-болғай алыҫлашты.

Хәҙер уларҙың араһын хаттар бәйләне. Йылы яҙылған хаттар, һағыныу хаттары. Зәйтүнгөл апай ҙа хат алышҡанды белеп ҡалған, Шәмсийыһан еткергәндер, күрәһең. Бер осрашҡанда:

— Ниҙәр яҙа минең һылыуым, һау-сәләмәттәрме? — тип һорай һалды.

— Иҫән-һауҙар, һеҙгә сәләм әйтә. — Йәшермәне егет. Шундай ҡыҙ менән осрашыуын Мөхәмәтша ағаһына ла һөйләне Закир. Ағаһын икәүләшеп барып ҡайтырға өндәне. Риза булды Мөхәмәтша, киттеләр тәүәккәлләп. Уларҙан алда хат осто Туймазы яғына.

Ниндәй сәбәп табайыҡ тип баш ватҡандан һуң, күстәнәскә ике ҡаҙ алырға килештеләр.

— Ауылығыҙға йомош менән килеп сыҡҡайныҡ, Зәйтүнгөл күстәнәс ебәрҙе, тип береһен тотторорбоҙ, икенсеһе беҙҙән күстәнәс булыр. — Хәйлә икеһенә лә оҡшаны.

Уларҙы һый-хөрмәт менән ҡаршыланылар. Етеш, ыҫпай йәшәгән ғаилә икән. Яғымлы йөҙлө, асыҡ күңелле ата-әсәһе ҡыҙҙың. Шәмсийыһан үҙе көҙгө баландай ҡыҙарып, һиҙелер-һиҙелмәҫ йылмайыу һирпеп, ирҙәр араһында буталмаҫҡа тырышып, бесәй һымаҡ ҡына үтеп-һүтеп йөрөй. Һәр ваҡыт эш менән мәшғүл, бушамай, йәнәһе лә.

Егет менән ҡыҙ, һиҙҙермәй генә, ҡыҫҡа ғына арала фекер уртаҡлашып алырға өлгөрҙө.

— Ризалығың бирһәң, оҙаҡламай яусы ебәрербеҙ, — тине Мөхәмәтзакир асыҡтан-асыҡ.

— Атай-әсәйем ни әйтер, уларҙың һүҙе — һүҙ. — Ҡыҙҙың да тел төбөндә килешеү ята түгелме?

Кинәнеп ҡунаҡлап, һөйөнөп ҡайтты былар. Инде атай-әсәһенең ҡолағына төшөрәһе ҡалды. Майкамал апай, бәхет яуһын тип, Хоҙайҙан теләне хатта. Тиҙерәк яусы ебәреүҙе хуп күрҙе. Икенсе тапҡырға китте Мәхәмәтша ағаһы. Был юлы ҡатынын эйәртте. Килешеп, туй яһар ваҡытын билдәләп ҡайтып төштөләр. Шулай киленле булды Майкамал апай. Мөхәмәтшакирының был шатлыҡты күрә алмағаны ғына ҙур үкенес ине.

Тормош һәүетемсә генә аҡты. Ике эшһөйәрҙең донъяһы күренеп бөтәйә барҙы. Бер йыл эсендә йорт һалып, башҡа сығырға ла өлгөрҙөләр. Туймазынан төшкән килен егәрленең егәрлеһе ине. Үрсемле лә булып сыҡты: аллы-артлы алмалай өс бәпес тапты. Майкамал апайға бер йыуаныс килде. Баланың балаһы балдан да татлы, тип, теттереп тормош ҡороп ятҡанда, донъя тетрәне, имәнес һуғыш уты ҡабынды.

Мөхәмәтзакирҙы һуғыштың нәҡ ҡыҙған сағында, 1942 йылда алып киттеләр. Ул да пехотаға эләкте. Ябай һалдаттың, тыштан тыныс кеүек күренһә лә, эсендә дошманға әсе үсе ҡайнаны. Ҡурҡыу белмәҫ ир ине ул, атакаларға алдан ташланды. Йылға яҡын йән аямай һуғышты һәм... Яу яланында ятып ҡалды... Ил һаҡсылары иң хәтәр, иң яуаплы һынау үткән 1943 йыл ине ул.

Айҙар буйы устар ҡабарғансы ураҡ урған көндәр ҙә артта ҡалды. Ус ҡына сейләнәме һуң әле, иртәле-кисле һалҡынға, ысыҡҡа лысма сыланып, бөгөлмәҫ хәлгә етеп бармаҡтар ҡата. Бер әҫе, бер һыуыҡ һауа, дым тәьҫиренән ҡул һырты ярылып, ҡанһырап, ҡутырлай башланы. Эшләгәндә генә һиҙелмәй, аҙаҡ үҙәккә үтә бит һыҙлауы.

Хәҙер алтмыштан уҙған Майкамал апай, бер аҙ хәл йыйырға кәрәк, тип тынысланмаҡсы ине — булманы, сүмәләләрҙе һалырға кәрәк ине. Ашлыҡты һуҡтырып та алаһы бар бит әле.

Фронтҡа икмәк кәрәк, көн-төн илде яҡлап үлем менән йәшәү араһында ажарланған ирҙәребеҙ, улдарыбыҙ аслыҡтан интекмәһен! Үҙебеҙ икмәк төҫө күрмәһәк тә, һуғышсыларҙың тамағы туҡ булһын.

Ошондай саҡырыу һәр кемде — олоһон-кесеһен аяҡҡа баҫтырҙы, халыҡ ырҙын табағында ҡайнашты хәҙер. Был ваҡытта Майкамалдың һуғышҡа киткән өсөнсө улы урынына бригадир итеп Сания исемле йәш ҡатынды ҡуйғайнылар. Өҙгөс булып сыҡты ул, берәүгә лә буш ятырға ирек бирмәне. Майкамал апайға ла килеп инде.

— Ауыр икәнен беләм, апай, йәшең, аҡ сәсең алдында ла баш эйәм, күҙ-ҡолаҡ булып йөрөһәң дә файҙаһы тейер, бар инде, зинһар, ырҙын табағына, — тип инәлде.

Ошондай үтенесте нисек кире ҡағаһың инде — иренән ҡалған һырма салбарҙы, фуфайка, бүрек кейеп, ырҙын табағына ашыҡты. Кейемдәре килбәтһеҙ ҙә ул, ыжғырған бынау көҙ һыуығынан нисек һаҡланаһың башҡаса. Килһә, бөтә ҡатын-ҡыҙ ҙа шул сама кейенеп алған икән дә!..

Көлтә һуғыуҙа башта дәү тимер тәгәрмәстән яһалған ҡулайламаны аттар менән әйләндереп хитландылар. Теге тәгәрмәстең дүрт тарафынан оҙон, йыуан кәртәгә дүрт ат егеп, түңәрәк буйлап әй ҡыуалар. Бахыр аттар әйләнеп йөрөй-йөрөй хәлдән тая. Ат ҡыуалаусылары — сыбыртҡы тотҡан малай-шалай. Көлтә һуғыу барабаны аттар өйөрөлдөргән тәгәрмәс менән, нисектәр, яйламалар ҡулланып, киң, ҡалын брезент ҡайыш аша тоташтырыла. Тәгәрмәс әйләндеме, аяҡтың баш бармағы хәтлем тешле барабан да хәрәкәткә килә. Шул барабан йота ла ҡуя көлтәне, башаҡтары ҡағылып-һуғылып, аҫтына ашлығы ҡойола.

Был бик яйһыҙ, ауыр, әкрен барған шөғөл ине, әлбиттә. Оҙаҡламай барабанды мотор ярҙамында эшләтә башланылар. Бына бында инде бер нисә минутҡа ҡул төшөрөп, баш ҡалҡытыр әмәл дә ҡалманы.

— Давай көлтә!

— Һаламды тиҙерәк таҙартырға!

— Аҫҡа иген өйөлөп китте, алығыҙ!

Шундай әмерҙәр туҡтауһыҙ яңғырап торҙо.

Ошондай хәлдә иген һуҡтырыу ҡатмарлы, яйһыҙ, тын алырға ирек тә ҡалмаған тынғыһыҙ, шул уй ваҡытта хәүефле эш. Күп кеше талап итә. Эҫкерттән барабанға саҡлы теҙелешеп баҫып, көлтәне ҡулдан-ҡулға

өҙлөкһөҙ биреп торорға кәрәк. Ҡулдан-ҡулға биреүселәрҙең күбеһе йәш ҡыҙ-ҡырҡын, үҫмер егет-елкенсәк. Көлтә оҙон итеп эшләнгән өҫтәлгә килеп етә. Унда бер нисә ҡатын күҙ эйәрмәҫ етеҙлектә ураҡ менән көлтә бауын киҫеп, барабансыға шыуҙыра. Бында таҫыллыҡ та, абайлыҡ та кәрәк, яңылыш, ҡабаланып ҡулыңды ураҡ киҫеп ҡуймағайы. Күҙгә кәбәк һирпелмәһен өсөн ярты битте ҡапларлыҡ ҙур күҙлек кейеп, барабансы көлтәне «йоттора» барабанға. Уның алдында, ҡойон күтәрелгәндәй, саңтуҙан, кәбәк өйөрөлөп оса. Артабан барабандан сыҡҡан һаламды, кәбәкте ситкә тартып өйөүселәр, барабан аҫтына ҡойолған игенде көрәп икенсе урынға күсереүселәр, иген елгәртеүселәр, мотористар — бына күпме көс менән игелә иген.

Майкамал апайҙың оло ҡыҙы Бәҙеғолъямал ғәҙәттә барабансы урынына баҫа. Ул белә, оҫтарған ошо шөғөлгә. Әсәһе — уға йәнәш — көлтә биреүсе. Бөтәһе лә — икенсе ҡыҙы Фәрхиямал, килендәре, ҡул араһына инер ейән-ейәнсәрҙәре ошонда Майкамал апайҙың. Һәр береһе фронт өсөн йән ата. Фронт та, тыл да еңеү хаҡына тығыҙ сафҡа баҫҡан.

Көндө төнгә ялғап, ырҙын табағын мыжғытып ашлыҡ һуҡтырған бер мәлдә ҡапыл бәлә килде. Бәҙеғолъямалдың бармағы барабан тешенә эләкте. Моторист егет йылғыр икән, шунда уҡ моторҙы туҡтатты. Һарғылт игенгә ҡан аға башланы. Әсә шунда уҡ ҡыҙына ярҙамға ташланды. Майкамал апай бүрек эсенән бәйләгән яулығын һыпырып алып, ҡыҙының йәнселгән бармағын бәйләне. Ярай өҙөлөп сыҡмаған, был аяуһыҙ тимер киҫәге бармаҡты ғына түгел, ҡулыңды ла һурып алыр. Ундай хәлдәр тураһында ишетелгеләне бит юғиһә.

Бәҙеғолъямал ауыртыуҙан өҙгөләнә, үҙе һаман эш хаҡында ҡайғырта.

— Барабан алдына кем баҫа инде хәҙер?

Майкамал уны йыуата.

— Уныһына кеше табылыр, ҡулыңды йыуа һал, аҙып китмәһен... Туҡтатмағыҙ эште, ҡана, үҙем баҫам, — тип, ғәййәр төҫ менән Бәҙғолъямалдың күҙлеген кейә башланы.

Сания туҡтатты уны.

— Ҡуй, апай, йәшерәккә ҡушырбыҙ, оло кешенең етеҙлеге лә етмәҫ, арып та китерһең. — Бригадир уны үҙ урынына ҡуйҙы кире. — Йәгеҙ, йәшерәктәрҙән кем теләй?

— Мин теләйем. — Фәрхиямал барабан алдына килде. — Апайымдың урынына мин баҫырға тейешмен.

Мотор үҙенең көйөн дауам итте, барабан гөжләп көлтәләрҙе «сәйнәне».

Бәҙеғольямал был ҡышта яңынан ашлыҡ һуғыу эшендә ҡатнаша алманы. Бармағы оҙаҡ төҙәлмәй йонсотто. Һуғышҡа саҡлы уҡ ире вафат булып тол ҡалған, ике ҡыҙын да кейәүгә оҙатҡан Бәҙеғольямал өйҙә яңғыҙы толҡа тапманы, ҡулы төҙәлер-төҙәлмәҫтән эш һорап, бригадирға килде. Сания уға келәткә һалған игендең иҫәбен алып ултырырға ҡушты.

Йә Хоҙай, башҡаса ҡазаларға юлыҡмай ғына иген дә һуғылып бөттө. Ҡара ергә аяҡ баҫҡансы таҙартып өлгөрәһе бар. Яҙға табан һауа дымлана, епшек ҡар, ямғыр ҡатыш ырашҡы яуып үтә. Иген дымға сыҙамай, көн эсендә шыта башлай. Шуға ла был эште лә йәһәтләй һалырға кәрәк. Ҡатын-ҡыҙҙың күбеһе келәт эсендә хәҙер. Майкамал апай йәш сабый аҫыраған Шәмсийыһан килененә инеп сығырға ла форсат тапмай. Арып ҡайта ла йығыла, иртән тора ла, бәрәсләгән кәзәһен һауып, алдына бесән ырғытып, эшкә ашыға. Бөгөн икенсе кәзәһе бәрәсләргә етеште. Шуны һағалап, келәткә бармай ҡалды. Әлдә көткән әле, көндөҙ кәзәһе ике бәрәс килтерҙе. Шулар менән мәшәҡәтләнә, әйләнгән һайын тәҙрәгә күҙ ата — почтальон ҡыҙҙы көтә. Кисә бер юлы Кәшфелғилемдән, Мөхәмәтйәндән хат алды. Ҡат-ҡат уҡыны, эштә ҡыҙҙарына биреп яңынан уҡытты. Был ике улы иҫәнлеккә иҫән дә ул, ҡаты яраланып, дауаланып яталар икән. Икеһе — ике яҡта. Яраланһалар ҙа, иҫән-һау булыуҙарына шөкөр ҡылды. Ана, Хәмдиәнең йәп-йәш улы һыңар аяғын ҡалдырып ҡайтты, бисара бала. Әсәһе бер ҡулын елкәһенә һалдыртып, һау аяғын һикерттереп, урамда ла йөрөтә улын. Шуға ла шат әсә кеше.

Ысынлап та, урам буйлап арып-талып атлаған почтальон ҡыҙ күренде. Майкамал апай уның ҡаршыһына сығып баҫты.

— Бөгөн хат юҡмы миңә, ҡыҙым?

Ҡыҙ, ниңәлер, баҙап ҡалғандай. Бойоҡ ҡына итеп башын эйеп, күн моҡсайын һәрмәштерҙе. Ҡапыл ҡулын нимәнәндер ҡурҡҡандай тартып алып, бер һирпелде, ике... Бите буйлап йәш бөрсөктәре тәгәрәп төштө.

Тертләп китте Майкамал.

— Әллә, ҡыҙым...

Почтальон уның күкрәгенә һарылды. Бүҫелеп иларға кереште.

— Башҡаса хат ташымайым, әбекәйем. Көн дә, көн дә... Киленегеҙгә, Шәмсийыһан еңгәгә хәбәр килде.

Әсә, йөрәге сығырҙай булып, килененә йүгерҙе. Барып инһә, сабыйын күкрәгенә ҡыҫып, үҫә төшкән ике балаһын итәгенә баш терәтеп, һуштан яҙған кешеләй ултыра килене. Ҡәйнәһен күргәс, һиҫкәнеп, аяғөҫтө баҫты, үҙәк өҙгөс әсенеү менән күҙ йәшенә күмелде. Әсә күңеле тетрәмәй буламы инде — ҡосағына алды киленен, бәләкәстәре нәнәйҙәренең итәгенә йәбеште, хатта бер ни аңламаҫ сабый ҙа сырылдап илап ебәрҙе. Ике әсә, өс сабый ҡара ҡайғының әрнеткес утында яна...

Ошо килеш оҙаҡ торғандан һуң, Шәмсийыһан кеҫәһенән ҡағыҙ киҫәге сығарҙы. Әсә уҡый белмәһә лә, шешенгән күҙ ҡабаҡтарын көслөк менән асып, ҡағыҙға текәлде.

— «Ил өсөн ҡаты һуғышта батырҙарса һәләк булды», тип яҙғандар... — Аңлатты ла йәнә түгелде килене. — Эй Хоҙайым, нишләйем инде хәҙер?

Йыуатманы әсә киленен, файҙаһы теймәҫ ине барыбер. Үҙен һуң кем йыуатыр, бауыр ите өҙөлөп төшкәндәй әсәнең... Беренсе «ҡара ҡағыҙ» ине был, беренсе генә... Ошо бәләкәй ҡағыҙ, күпме кеше күңелендә утлы өйөрмә ҡайнатып, ҡот осҡос бомба һымаҡ ярыла, әйтерһең...

## Ғәйнелғилем

Ауыл халҡының күбеһе, айырыуса йәштәр, ҡушма исемлеләргә, ғәҙәттә, береһен генә әйтеп өндәшә. Ғәйнелғилемгә Ғәйнел тигәне нығыраҡ йәбеште. Быға үҙе лә ҡәнәғәт ине ул. Хәҙер яңыса тормош ҡоролдо, яңысараҡ яңғыраһын, әйҙә, исеме лә.

Ғәйнел бәләкәйҙән үк теремек, кеше менән тиҙ аралашыусан булды. Ни ишетһә, нәмә күрһә — шуның менән ҡыҙыҡһынмай ҡалманы. Бала саҡтан уҡ, тиҫтерҙәрен йыйып, уйындар ойоштора, кесерткән, дегәнәк араларында боҫа-боҫа, ҡыҙылдар — аҡтар «һуғышын» башлап ебәрә. Кесерткән сағыуҙан тәндәре бөртеп бөтә, ҡайһы бер малайҙар түҙмәй, өйҙәренә табан ялтырата, ә был ҡалғандары менән һаман дауам итә. Граждандар һуғышынан һуң ошондай уйындар киң таралғайны. Чапай тигән батыр командир хаҡында ла ишеткәйнеләр инде. Ғәйнел кесерткән араларында боҫоп йөрөгәндә Чапай кеүек хис итте үҙен. Аңдып ята-ята ла, таяғын һелтәп, ҡыя ғына уңлы-һуллы дегәнәк, кесерткән баштарын.

Ҡыҙылдар менән аҡтар айҡашҡан заманда Ғәйнелгә ун йәш ине. Ихаталағы көсөктө атып, аты менән бергә Мөхәмәтша ағаһын алып киткән аҡ әфисәргә үс ҡайнатты. Ух, шуны тотоп, арҡаһын ҡабартҡансы сыбыртҡы менән ҡайыҙлаһаң ине, тип ҡыҙышып йөрөнө. Ауылға ҡыҙылдар килеп ингәс, улар тирәһендә буталды. Аҡтар өйөрө, ҡоттары осоп, ҡасып өлгөрҙө шул, тегене ҡайыҙлай алмай ҡалды. Әфисәрҙе нисек тә тоторға хәйләләр эҙләп баш ватты. Ҡыҙылдар менән китергә кәрәк, тигән ҡарарға килде... Уңайы сыҡты бит быуна: һыбайлылар артынан ҡуҙғалған ылауҙарҙың береһенә шыпырт ҡына менеп, әйберҙәре араһына боҫто. Йәшеренеп Сатраға тиклем барып етте хатта. Инде үҙен ҡыҙылармеецтай күреп, арба төбөндә кәпрәйеп ятҡанда, атын туҡтатты бит ылаусы һалдат. Нимәлер эҙләп аҡтарына башланы. Шул саҡ ҡулы тейеп ҡалды малайҙың тәненә. Ҡорошто малай, терпе балаһылай йомарланды. Йомарланыу менәнме ни, бер эләккәс ҡармаҡҡа. Һөйрәне лә сығарҙы малайҙы теге. Ылауҙың артта ҡалыуын күреп, командирҙары ла атын тыпырлатып килеп етте.

— Быуна бер малайҙы тоттом, йәшеренеп ятҡан арба төбөндә, — тип, әллә кемде ҡулға төшөргәндәй, рапорт бирҙе һалдат.

— Дә, күреп торам. Нимә кәрәк һуң был балаға? — Командир, эйәрҙән һикереп төшөп, малайға башынан аяғынаса күҙ йүгертте.

— Нимә кәрәген белә алмайым, иптәш командир, өндәшмәй-һөйләшмәй, телен йотҡан, ахырыһы.

Башын эйеп тексәйгән малайҙың алдына эйелде командир.

— Нишләп йөрөйһөң, улым, анау әле беҙ сыҡҡан ауылданмы һин? — тип, сәсенән һыйпап, яғымлы өндәште.

Малай урынына ылаусы яуап бирҙе:

— Шунан булырға тейеш, бер-ике рәт күҙгә салынып ҡалғайны ул.

— Һөйлә әле, улым, ҡайҙан һин, атай-әсәйең бармы?

Ғәйнел йомшарып китте. Ҡапыл ғына ата-әсәһен иҫенә төшөрҙө, ысынлап та, уны юғалтып, ҡайғы-хәсрәткә батырҙар бит.

Баш ҡаҡты малай, етемһерәп кенә ауылы яғына ҡараны.

— Шул ауылданмын, — тип ауыҙ асты, — атай-әсәйем дә бар.

— Ниңә һуң ҡасып китергә булдың, яратмаймы әллә үҙеңде атай-әсәйең?

Ныҡ торорға тырышһа ла, күҙенән борсаҡ ҙурлыҡ йәш бөртөгө тәгәрәне лә төштө.

— Яраталар...

— Шулай булғас һуң, нимә етешмәй тағы?

— Минең яратҡан ағайымды аҡтар алып китте, ҡурҡытып. Эфисәрен барыбер эҙләп табып, кәрәген бирәсәкмен!

— Бына эш низә икән, — тип һуҙҙы командир. — Молодец, дуҫ менән дошманды айыра беләһең.

— Һуғыш ул бер кемгә лә дуҫ түгел! — Сәпәне лә һалды уйлағанын Ғәйнел.

— Быныһы ла бик дөрөҫ, ләкин донъяла дуҫ та, дошман да бар шул, ҡыҙғаныска ҡаршы. Һуғыш оҙаҡ йылдарға һуҙылыр әле. Өлгөрөрһөң һин дә. Яңы тормош төҙөргә лә кәрәк буласаҡһың. — Бик етди һүҙҙәр һөйләп ташланы командир.

Аңлар-аңламаҫ ҡиәфәткә инде малайҙың йөҙө. Мөлдөрәп баҡты ағайға.

— Алығыҙ инде, атта ла елдерә беләм мин, сабышҡанда беҙҙең бурыл береһен дә еткермәй торғайны, — тип тә үҙенең йылғырлығын белдерергә тырышҡайны, килеп сыҡманы.

— Бар, улым, ҡайт инде, атай-әсәйең эҙләп йонсоғандыр. Беләһеңме ҡайтыу юлын?

Малай йәнә һыу ҡапты. Ҡыҙылдар алмағанын белһә, дуҫ-иштәре бот сабып көләсәк. Һуғышҡа китәм тип Фәрүәзгә лә әйтеп өлгөргәйне бит әле, хәйерһеҙ.

Командирҙы көтөп, отряд та туҡтағайны. Ағай бер ауылға, бер отрядҡа ҡараны ла, көр тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе:

— Привал! Мин әйләнеп килгәнсе ял итә тороғоҙ!

Унан, малайҙы еңел генә күтәреп, эйәр алдына ултыртты. Үҙе лә һикереп менде атына. Бер ҡулы менән малайҙы ҡосаҡлап, ауылға табан борҙо уйнаҡлаған атын.

Ғәйнел ауылға яҡынлашҡан һайын ҡуҡырайыбыраҡ барҙы. Эреләнеп, башын юғарыраҡ күтәреп килә командир ҡосағында. Бына хәҙер күрһендәр инде, кемдең әле шулай йөрөгәне бар? Ысынлап та, теләккә — бүләк, тигәндәй, Фәрүәз осраны ла ҡуйҙы бит! Ауыҙ асып, күҙен шарҙай аҡайтып ҡалды юл ситендә.

Атай-әсәһенең ғәжәпләнеүенең сиге булманы. Мөхәмәтшакир ағай түбәнселек менән командирға өндәште:

— Берүк ғәфү итегеҙ инде малайым өсөн.

Майкамал апай ҙа ҡушылды:

— Тынғыһыҙ ул шулай, ҡыҙыҡ эҙләй ҙә йөрөй.

— Нисауа, шәп егет сығыр бынан, ҡыйыулығы хәҙер үк күренә.

Командир, арҡаһынан һөйөп, малайҙы төшөрҙө лә кире сапты. Бына ошонан һуң кесерткән аралары малай-шалай өсөн һуғыш майҙанына әйләнде.

Командирҙың һөйләгәндәре Ғәйнелдең күңелендә оҙаҡ һаҡланды: «Яңы тормош төҙөргә ауылда ла кәрәк буласаҡһың». Дөрөҫ әйткән икән, алдан белеп йөрөгән, уҡымышлы кешеләр, күрәһең: бер нисә йылдан ауылда Советтар төҙөү башланды. Тәүге партия, комсомол ячейкалары ойошторолдо. Ғилемле кешеләр халыҡҡа аң-белем таратыу, наҙандарҙы уҡыу-яҙыуға өйрәтеү эше менән шөғөлләнде. Ул осор Ғәйнелдең егет ҡорона баҫҡан сағына тура килде. Башта ул комсомолға инеп, ячейканың иң алдынғы ағзаһы булып китте. Ячейкаға ылығыусылар ҙа арта барҙы. Улар менән өмәләргә сыҡтылар, мәҙәни саралар ойошторҙолар. Ауылға йәнлелек өҫтәлде. Артабан Ғәйнелғилем партияға инергә теләк белдерҙе. Уға бер тауыштан «булдыҡлы егет, йәштәр өлгө алырлыҡ», тип ышаныс күрһәттеләр. Колхоз төҙөү барғанда ла халыҡты берләшергә өндәп йөрөүсе ул ине. Атаһын күндереп, атты бирмәйем тип ҡыр талашҡан Мөхәмәтзакир ағаһын өгөтләп, тәүгеләр итеп күмәк хужалыҡҡа индерҙе. Анау ваҡытта ҡыҙыл командир әйткән яңы тормош ошо икәненә инанды. Башҡаса ҡайһылай булһын, байҙарҙың көнө бөттө, ер халыҡ ҡулында, үҙҙәре сәсә, үҙҙәре ура, икмәк — уртаҡ. Байға көнлөккә эшләү түгел инде был.

Колхозда яуаплыраҡ эшкә коммунистарҙы ҡуйҙылар. Йыйылыштарҙа Ғәйнелдең дә фамилияһы ишетелде.

— Бригадир итеп кемде һайлайбыҙ? — тигән һорау килеп баҫты. Байтаҡ кешене теҙҙеләр.

— Беҙҙең бит йәш егетебеҙ бар — Латипов, — тине колхоз рәйесе.

Ыҡ-мыҡ иттеләр, өҙөп кенә ҡеүәтләүсе ишетелмәне.

— Йәшерәк шул, кешеләрҙе тыңлата алырмы һуң?

— Бик өлгөр күренә, ҡыра һуғып, өҙә тотмаҫмы?

— Өйләнмәгән дә бит әле ул, ай-һай...

Ауыл советы рәйесе Ғәниев Шәғәли һүҙ алды. Граждандар һуғышы юлдарын үткән абруйлы ағай ине ул. Уның һүҙ-тәкдиме менән һәр кем иҫәпләшә.

— Йәш тип кире ҡағырға ашыҡмайыҡ әле. Төптәнерәк уйлап ҡараһаҡ, беҙ үҙебеҙ ҙә йәш йәмғиәт төҙөйбөҙ бит. Йәштәр һәр урында кәрәк улар. Граждандар һуғышында күпме һәләтле йәш командирҙарҙы күрергә тура килде миңә. Ҡыйыуҙар ине, дошманға ҡаршы күкрәк киреп барҙылар. — Уратып аңлата рәйес.

Шул саҡ уны тауыш бүлдерҙе:

— Бында һуғыш түгел бит, яғалашырға йыйынмайбыҙ.

Ғәниев Шәғәли быға ла яуап тапты:

— Яңылыҡ ул — көрәш, революцияны ғына алып ҡарағыҙ, бында ла уның дауамы бара. Ләкин бөтә көрәште лә ҡан ҡойош тип аңларға

ярамай, тыныс юл менән маҡсатыбыҙға ирешеү ул. Беҙҙең ошо изге бурысыбыҙҙы үтәүҙә йәштәр дәррәү ҡатнашырға тейеш. Киләсәк йәштәр ҡулында, өйрәнһендәр, тормоштоң эсендә ҡайнаһындар. Аңлашылмаған ҡыйынлыҡтар килеп тыуһа, булышырбыҙ, юл күрһәтербеҙ. — Тулы бер телмәр һөйләп ташланы ауыл советы рәйесе.

Уның сығышынан һуң фекерҙәр ҡырҡа үҙгәрҙе.

— Дөрөҫ һөйләй Ғәниев иптәш.

— Беҙ ҡарттар йәмғиәте төҙөмәйбеҙ, йәшенә түгел, эшенә ҡарарға тейешбеҙ.

— Латиповтың кандидатураһы тап-таман бригадирлыҡҡа.

Икенсе көндө таң менән Ғәйнел, елкәһенә яуаплылыҡтың ауыр йөгөн һалып, эшкә сыҡты. Нимәнән башларға тип интегеп торманы ул, миҙгел үҙе ни менән шөғөлләнергә кәрәклекте әйтеп тора. Ошонда тыуып үҫкән егеткә бөтәһе лә биш бармаҡ кеүек билдәле: кешеләрҙе белә, баҫыуҙарҙы нисәмә-нисә гиҙгән, ниндәй хужалыҡ барлығы ла мәғлүм — күңелгә әйәр һалырға ғына кәрәк.

Ыңғай барҙы бригаданың эше. Аттарҙы ҡарарға ағаһын алды. Ағай тигәне лә әллә ҡайҙа китмәгән: бер йәшкә генә олораҡ, кесерткән кисеп, бергә уйнап үҫтеләр ҙәһә.

Йыйылышта «өйләнмәгән дә әле» тиеүҙәрен аҡыллыға ишара һымаҡ ҡабул итте Ғәйнел. Мөхәмәтзакир ҙа, ана, йыраҡ тип тормай, ата-әсәһен киленле итеп, өйгә йәм өҫтәне. Әллә ул артта ҡалырмы? Ғәйнелдең йәштән үк күҙ атып йөрөгән ҡыҙы ла эргәлә, алыҫҡа йөрөйһө юҡ, ауылда ғына. Шаярышып һөйләшкән саҡтары ла күп Хәлиҙә менән.

— Ниңә битең алма кеүек, Хәлиҙә. — Йырға оҡшатып көйләне Ғәйнел.

Ҡыҙ ҙа юғалып, оялып ҡалманы, яуапты тиҙ тапты:

— Һине күреп оялам, егеткәй, — тип һуҙҙы.

Икеһе лә кинәнеп көлөштө. Улар концерттарҙа ҡатнашып, бер-береһенә өйрәнеп бөткәйнеләр инде.

Әле лә, бригадир булып алғас, Ғәйнел көн дә тиерлек күреп йөрөй Хәлиҙәне. Эшкә әйтеү һылтауы менән инә лә сыға. Бер көндө атына ултыртып бесән йыйырға алып китте. Көн зәһәр ваҡытта өмә яһарға уйлашҡайнылар. Хәлиҙә келәттә эшләргә тип ҡалған. Келәттән барып алды уны Ғәйнел.

— Келәтте өлкәнерәк апайҙар ҙа таҙарта ул, әйҙә бесәнгә, унда йәштәр өмәһе бөгөн. Эшләрбеҙ ҙә, кисен уйын ҡорорбоҙ, — тип ҡыҙыҡтырҙы.

— Гармунсығыҙ өйҙәме һуң?

— Өйҙә. Ул да шунда өмәлә.

Барышлай, Сатра ҡыуаҡлығында атын туҡтатты егет.

— Бәй, нимә булды? Бригадирһыҙ ниндәй өмә башланһын ти.

— Хәҙер, арҡалыҡ бушаған, күтәрәм дә.

Атын урап сыҡты ла, етди төҫ алды Ғәйнел.

— Мин күптәнән бер һүҙ әйтергә йыйынып йөрөйөм һиңә, Хәлиҙә.

— Берҙе түгел, икене әйт, тыңлайым.

— Берәүһе лә берәгәйле уның.

Ҡыҙ ҙа етдиләнде, ниҙән башларға белмәй ыҡ-мыҡ иткән егеткә текләне.

— Әйт һуң берәгәйлеһен.

— Мин яратам бит...

— Яратҡаныңды әйт һуң, кем ул, үҙем яусылап барырмын.

— Бына, эргәмдә ултыраһың...

— Хи-хи, беҙ бит дуҫтар, Ғәйнел, яратмаған ниндәй дуҫ була тағы?

— Мин ысынлап...

— Мин дә ысынлап... Һөйәм тиһәң инде әгәр...

— Яратыу, һөйөү бер түгелме ни?

— Ныҡлабыраҡ уйлаһаң, айырма бар шул: малды ла яратырға була, туғаныңды ла, башҡаһын да.

— Улайһа, төҙәтәм: мин һине һөйәм. Улай ғына түгел, кәләш булыуыңды теләйем. Хуплайһыңмы?

— Алыу-барыуҙар борондан килгән йола... Атайыңа-әсәйеңә әйттеңме әле?

— Юҡ, сыҡмаған ҡояшҡа нисек ҡыҙынаһың, башта һөйләшмәйенсә.

Хәлиҙә лә өҙөп кенә яуап бирмәне.

— Уйларбыҙ, атай-әсәй фатихаһын көтөрбөҙ, — тине.

Һөйләшеү шуның менән өҙөлдө. Өмәгә барыусы бер төркөм йәштәр килеп ҡушылды.

Өмә ғәләмәт шәп үтте. Төшкөһөн тәмле аш менән һыйландылар. Кискеһен йырлашып-бейешеп кинәнделәр. Бөтәһенә лә оҡшаны күмәкләгән эш.

Бригадир төрлө саралар уйлап табып ҡына торҙо. Идарала уның эшенән ҡәнәғәтлек кисерҙеләр. Ыңғай ине бөтәһе лә, бынау Хәйрүш менән булған хәл килеп сыҡмаһа. Уның арҡаһында, һиҙгерлекте кәметкәнгә һылтап, партия йыйылышында шелтә сәпәп ҡуйҙылар. Шунан ары һаҡал түгел, аҡыл кәрәген аңланы. Ул мәлдәрҙә шелтә — шиккә ҡуйыуға бәрәбәр ине.

Ә Хәлиҙә менән аралар өҙөлмәне, нығынды, күрмәй түҙмәҫ хәлгә етте. Уларҙың өйләнешеү теләгән ата-әсәләре ҡуш ҡуллап хупланы. Оҙаҡламай туй яһап ебәрҙеләр. Әлбиттә, туй Мөхәмәтша ағаһыныҡы кеүек бер аҙнаға һуҙылманы, бер көн егет яғында, икенсе көн ҡыҙ яғында тамам ҡылынды. Оҙон-оҙаҡ һуҙып байрам итер замана түгел ине шул.

Тормоштары йәмле барҙы. Үҙ йорттарын күтәрҙеләр. Бәпестәре тыуҙы, улар өсәүгә етте хәҙер.

Донъя теүәлләнгәйне. Бригада эше лә ыңғайға һалынғайны. Киләсәктә тормош тағы матурланыр төҫлө ине. Ҡапыл бөтәһе селпәрәмә килде: һуғыш башланды, аяуһыҙ, йән әрнеткес һуғыш...

Мөхәмәтзакирҙан ике айға ғына һуңлатып, Ғәйнелде лә һуғышҡа алып киттеләр. Уның менән бергә Хәйрүш тә эләкте. Фронтҡа барып еткәнсе әллә күпме юл үтелде. Сызрань тигән ҡала янында хәрби әҙер-

леккә өйрәнеп яттылар. Хәйрүш тә, Ғәйнел дә пехотала автоматсы ине. Тәүлек буйы сәпкә атып, окоп ҡаҙып, гранаталар бәреп, атакаға ташланып, тирә-яҡ баҫыу, ҡыуаҡлыҡтарҙы иҙгесләп бөттөләр. Эргәндәге ауылдашың ят яҡта — яҡын туған. Ауылды хәтерләп, ҡатындарын, балаларын, атай-әсәйҙе һағынып, һөйләшеп алалар. Бөтә үткәнең иҫкә төшә икән. Хәйрүш тә хәтерләне:

— Теге саҡта йығылып үлгән атты һаман йәлләйем әле. Әйтерһең, шайтан ҡотортто Баҡсалыға сабырға.

— Шайтанды ситкә ташлап тор, мөхәббәт тартты тиң. Һәй, дуҫҡайым. — Ғәйнел уның иңбашына ҡулын һалып көлә.

— Шулай инде. Йәшлек, йәшлек, беҙҙән дә үтте күҙ асып йомғансы...

— Хәтерләргә генә ҡала хәҙер... Йә, нимәгә башланың әле һин ул ат тураһындағы хәбәрҙе, — тине Ғәйнел юрый, быны ниндәй фекерҙә ҡалыуын белергә теләп.

— Хәтерләүем шул, һеҙгә ауырлыҡ килтерҙем мин тинтәк. Ғәфү ит инде, дуҫҡай!..

Шул минутта теҙелергә команда бирелде. Оҙаҡламай фронтҡа китәсәктәрен күптән белеп, көтөп йөрөйҙәр ине инде. Һалдаттар, ҡоралдар тейәлгән поезд, көрһөнә-көрһөнә, көнбайышҡа табан юл алды.

Күпме кеше яҙмыштары тейәгән вагондар, ярһыған йөрәк ҡағышылай, тәгәрмәстәрен тек-тек һуғып, алға ашыға. Шулай төн үтте, көн. Нимә көтә алда вагондағыларҙы — һәр саҡрым билдәһеҙлек эсенә инә бара. Һауаны ярып, самолеттар осорға кереште. Состав тирәләй гөрһөлдәп бомбалар ярыла. Тәрән ыңғырашып, поезд туҡтаны. Приказ яңғыраны:

— Бөтәгеҙгә лә сығырға, ҡыуаҡтар араһына боҫорға!

Ғәйнел менән Хәйрүш тә һикерҙе. Тағы бер нисә аҙымдан — ағаслыҡ. Нисек тә шунда барып йығылырға, хәүефһеҙерәк ергә! Һикереп төшөүҙәрен көткәндәй, бомбалар яуҙырып, самолет һауа ярҙы, артынан икенсеһе выжлап килеп сыҡты. Кешеләр, ҡымшанмай, ергә баш төртөп ята, әйтерһең, мәйет инде. Ғәйнелдәр вагонының командиры — өлкән лейтенант самолет күҙҙән юғалыу менән аяғөҫтө баҫа.

— Ҡыуаҡлыҡтарға, йәһәтерәк, йәһәтерәк!..

Бер-ике һикерҙеңме, тағы самолет ҡыйпыла. Тағы ергә йылышырға, тағы күтәрелергә. Күтәрелә алмай ҡалғандар ҙа күп.

Ғәйнел менән Хәйрүш һикереп тә, шыуышып та ағас төбөнә ышыҡланды. Ҡайҙа йәшеренәһең һуң, ағас япраҡтары ҡойолоп бөткән, һалҡын ҡара көҙ килгән саҡ. Шулай ҙа ҡола асыҡ ер түгел инде: ағас төбө, түңгәктәр бар. Ғәйнел ҙур өйөмгә төртөлдө. Нимә был?.. Ҡырмыҫҡа иләүе икән дә! Ғәйнел дә иләүгә һырыҡты, унан тиҙ генә йылғыр йәнлектәй соҡоп, ярты кәүҙәһен йәшерҙе. Тәнде йымбырлатып, әсетеү башланды.

Самолеттар үлем көҫәп өйөрөлдө-өйөрөлдө лә юғала барҙы. Тирә-яҡ һиллеккә күмелде. Тып-тын, бер кем дә юҡ, әйтерһең, ҡәбер тынлығы... Тынлыҡ оҙаҡ барманы, ҡарлыҡҡан көслө тауыш яңғыраны:

— Һалдаттар, подъем! Вагондарға, вагондарға!

Тауар вагоны ишегенә халыҡ тығылды, һәр кем алдан инергә тырыша. Күҙҙәре шешенгән Ғәйнел дә, саҡ-саҡ күреп, вагонға инде. Иң тәүге уйы Хәйрүш булды Ғәйнелдең: иҫән ҡалдымы икән ул? Ғәйнелдең исемен ҡысҡыра-ҡысҡыра Хәйрүш үҙе килеп тапты.

— Бәй, пуля тейҙеме әллә һиңә? — Аптыраны ауылдашы.

— Юҡ, иҫәнмен.

Ул арала өлкән лейтенант та иғтибарын йүнәлтте уға.

— Ни булды һиңә, Латипов, бүртенгәнсе мунса сабынған кеүекһең.

— Ҡырмыҫҡа иләүе, — тип әйтеп тә бөтмәне, командир аңлап алды.

— Сисен кисекмәҫтән, кейемдәреңде ҡаҡ.

Сыр яланғас сисенергә тура килде Ғәйнелгә. Кейемдәрен күтәреп, вагондың теге башындағы бәҙрәфкә йүгерҙе. Ярҙамлашырға Хәйрүш ашыҡты. Әле генә ҡобаралары осҡан һалдаттар йәнләнде, шарҡылдашып көлөшә.

— Һуғыштың тәүге мунсаһында сабынып та өлгөргән был.

— Бына һеҙгә тере шүрәле. Ха-ха-ха!..

Бөтә тәне бүртенгән Ғәйнелдең, сыҙар хәл юҡ, әрнеү ҡатыш ҡысыта. Хәйрүш менән кейемдәрҙе ҡырмыҫҡаларҙан таҙартҡан арала, паровоз да бышҡылдай башланы. Ҡуҙғалдылар ары. Эске кейеме менән генә сыҡты Ғәйнел бәҙрәфтән. Санитар егет тәнен шыйыҡса менән ыуғас ҡына һыҙланыуы баҫылғандай итте.

Бер аҙ яйланғас, Хәйрүш һорап ҡуйҙы:

— Фронтҡа барып та еттекме әллә? Ошо буламы икән һуғыш?

Бындай һорауҙы өлкән лейтенантҡа ла төбәүселәр табылды. Командир аныҡ яуапламаны, «то ли еще будет» тиеүҙән уҙманы.

Туҡтай-туҡтай бара торғас, төн урталарында төшөргә әмер бирелде. Уларҙы взводтарға бүлгеләп, землянкаларға индерҙеләр. Хәйрүш менән Ғәйнел йәнә бергә эләкте. Взводты икенсе командир ҡабул итеп алды. Ял итеү юҡ, күҙ асып йомған арала серем итергә лә өлгөрмәнеләр, теҙелергә саҡырҙылар. Аптыраны Ғәйнел: «Аба, күмәк икән һалдаттар!» Бер нисә офицер менән майор саф алдына баҫты.

— Мин батальон командиры булам, Петров фамилиям. Петров Сергей Петрович. Беҙ фронт һыҙығындабыҙ. Калинин ҡалаһы өсөн ҡаты һуғыштар бара. Дивизиялар ҙур юғалтыу кисереп, фашистарҙы, аҙымлап булһа ла, ҡыйратыуға күсте. Уҡсылар дивизияһына һеҙ яңы көс булып өҫтәләһегеҙ, — тип аңлатты Петров. — Һорауҙар бармы?

— Бар. Ҡасан инәбеҙ һуғышҡа?

— Ваҡыты еткәс әйтербеҙ, — тип һүҙҙе ҡыҫҡа тотто майор.

Оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Роталап-роталап оҙата торҙолар. Ғәйнел менән Хәйрүшкә лә сират етте. Йәйәү генә барылды был юлы. Йәнәш атланы ауылдаштар. Һөйләшеп тә алғыланылар туҡтаған араларҙа.

— Хат яҙырға ла өлгөрмәнек, исмаһам, — тип үкенде Хәйрүш.

— Форсат табылманы шул, һуғышҡа инеп киткәс бөтөнләй ваҡыт булмаҫ инде.

— Иҫән-һау ҡайтһаҡ, ғүмерлек дуҫ булышырбыҙ, йәме, — Хәйрүш киләсәк хыялына уралды.

— Бергә ут-һыу кискән кеше айырылмаҫ инде. — Ғәйнел йөпләне.

Тағы ҡуҙғалдылар. Алда бомбалар гөрһөлдәп ярыла, пушкаларҙан аталар, пулялар оса, төтөн ҡаплаған бар яҡты. Улар траншеяларға ырғылды.

Рота командиры ҡыҫҡа аңлатма бирҙе:

— Хәҙер фашистар атакаға ташланасаҡ, әҙер тороғоҙ!

Оҙаҡламай ер ярып үкергән имәнес танктар күренде. Арттарынан шартлатып ата-ата пехота эйәргән. Ҡаушай төштө бер килке Ғәйнел, былдай ҡурҡыныс өҫкә ябырылырын күҙалламай ине быға са. Танктар яҡынлаша килә, уларға атырға әмер бирелмәй һаман. Шулай бер ниндәй тотҡарлыҡһыҙ иҙгеләрҙәр ҙә китерҙәр һымаҡ...

Бер заман беҙҙең пушкалар «телгә килде». Ер өҫтө аҡтарылып һауаға күтәрелеүҙән танктар тоноҡ шәүлә кеүек кенә күренә. Бер нисәһен ут ялманы, ҡайһылары бер урында әйләнде. Баяғыса ярһып өҫкә килеү бер аҙ баҫылғандай.

— Атакаға!..

Ата-ата дәррәү күтәрелде автоматсылар. Пулеметтар тыҡылданы, гранаталар шартлап ярылды. Атака кире ҡағылды. Хәйрүш ҡайҙа? Битбашы ҡарайып, Хәйрүш килеп сыҡты, танырлыҡ та түгел үҙен.

— Иҫәнме һин?

— Иҫән. Күргәнеңсә.

Тын алырға ла өлгөрмәнеләр, яңынан атакаға. Командир, дәртләндереп, ҡысҡыра:

— Дошман күп көсөн юғалтты, эҙәрлекләп, үҙҙәрен дөмбәҫләргә кәрәк хәҙер!

Әллә нисә атакалар, обороналар үтте Ғәйнел менән Хәйрүштең башынан. Ҡыйралыш артынан ҡыйралыш, хатта штык менән ташланған осраҡтар булды. Дошман сигенә, былар артынан арҡа һабаҡтарын ҡайыҙлай. 1943 йылдың ҡышы ине был, фронттарҙың һөжүмгә күскән мәле. Харап хәтәр ваҡыттар, фашистар позицияһын ҡалдырмаҫҡа тырмаша, бар көсө менән йәбешә, совет яугирҙәре илебеҙ азатлығы өсөн алыша. Ике яҡтың йөҙгә-йөҙ бәрелешкән сағы.

Яңы Оскол ҡалаһы янында ғәрәсәтле алыштар барҙы. Шундай мәхшәргә кеше нисек түҙгәндер — баш етмәй. Күптәр ятып ҡалды. Хәйрүштең дә ғүмере өҙөлдө шунда. Атакаға барғанда Хәйрүштең ҡанға мансылған кәүҙәһе күҙенә салынды Ғәйнелдең, туҡталырға мөмкинлек теймәне. Аҙаҡ эҙләп ҡараны ла бит, таба алманы... Эй ауылдашым, фронтташ дуҫым, арҡаға арҡа терәп, күпме юл үттек, һөйләшеп туймаҫ серҙәр бүлештек бушыраҡ саҡтарҙа. Хәҙер мәңгелеккә юҡһың, үҙ ҡулым менән ерләй ҙә алманым... Юҡ тип дөрөҫ әйтмәйем, ғәфү ит, һин барһың, ата-әсәйеңдең, ҡатыныңдың, балаларыңдың, туғандарыңдың, ауылдаштарҙың — бөтә ил халҡының күңеленә инер рухың. Сөнки һин ил азатлығын яҡлап ауған батыр һалдат... Шулай юғалтты дуҫын, шулай һыҡтанды Ғәйнел...

Хәйрүштең хәлен белдереп, бер битлек кенә хат ебәрергә ваҡыт таба алды Ғәйнел. Шунан атакаға күтәрелделәр. Дошманды туҡмай-туҡмай

ҡалаға бәреп инделәр. Юлдарына мәйет түшәлде. Матур-матур йорттар ишелеп төштө. Һәр йорт өсөн йән аяманылар.

Ғәйнел өс ҡатлы йорттоң тәҙрәһенән пулялар яуҙыра. Ҡасып барған фашистарҙың юлын киҫә. Улар ҙа тик тормай, йортто сыбарлайҙар ғына пуля менән. Пушканан да тондоралар. Эргәһендәге иптәштәре лә һирәгәйҙе. Юҡ, бирешмәй Ғәйнел, бирешергә ярамай.

Һауала самолеттар аяуһыҙ дәү ҡарлуғастай ҡыйпыла. Фашист авиацияһы күтәрелде. Беҙҙең самолеттар ҙа күренде. Китте ҡыйралыш. Дошман бомбардировщиктары тирә-яҡты гөрһөлдәтә бомба менән, ер тетрәй. Ҡапыл ниҙер ишелдеме, күҙ асҡыһыҙ туҙан бураны күтәрелде. Эйе, йорт пыран-заран килде. Ғәйнел йәһәннәмгә осҡан кеүек тойҙо үҙен...

## Әсә

Хаттан элек Хәйрүштең үлем хәбәрен алдылар. Ҡойолоп төштө Майкамал апай, Ғәйнелғилеме менән бергә киткәйне бит, ни хәлдә, иҫәнме икән улы. Хәйрүштең ата-әсәһенә инеп, ҡайғыларын уртаҡлашмаҡсы. Ауылда һәр кем яҡын, хәлдәрен белешмәй нисек түҙерһең. Бәлки, шул ҡағыҙҙан улының да ҡайҙалығы аңлашылыр.

Хәйрүштең ата-әсәһе, меҫкендәр, бөршәйешеп, бер-береһенә ҡарашып ултыра. Майкамалды күргәс, йәнә быуылып йәш түкте әсә кеше. Ҡысҡырып уҡ иламаһа ла, танауын мышҡылдатып, әленән-әле стена яғына әйләнә ире. Ҡайғының ҡурғаш ауырлығы йөрәк итен ҡыҫҡаны һиҙелеп тора.

Майкамал да өндәшмәй баш баҫты. Быңдай саҡта ауыҙ асып һүҙ әйтеүе лә уңайһыҙ. Эх, һүҙ менән генә ҡайғыны баҫып булһасы. Уны һыу менән йыуып та, ҡул менән һыпырып та төшөрөү мөмкин түгел, йөрәктең үҙенә үтеп ингән. Тик йыуатмай ҙа булмай.

— Яҙмыштан уҙмыш юҡ шул. Үҙегеҙ бирешеп ҡуймағыҙ, бөтөрөнөргә тырышмағыҙ, сәләмәтлегегеҙҙе һаҡлағыҙ, — тип, Алмабикәне ҡосаҡланы.

— Берҙән-бер улым ине ләһә, ниңә Хоҙай ғүмерен бирмәне икән? — Алмабикә уның һайын үрһәләнде.

— Яуыз Гитлер, үҙе утта көйһөн, һөйәген ҡара ер алмай, теләһә ҡайҙа тапалып сереһен, — тип ҡарғаны ир кеше.

Килендәре, баҙауынан айнып, самауырға йәбеште. Өҫтәл янына Майкамалды ҡыҫтаны. Тәғәм ҡапҡыһы килмәһә лә, ултырҙы, аштарын һанға һуҡмаған кеүек була бит юғиһә. Берәр сынаяҡ сәй эскәндән һуң ғына килендән һораштырҙы Майкамал:

— Похоронныйҙы ҡайҙан килгән, ниндәй ҡаланан, билдәлеме?

— Уныһын яҙмағандар, «Батырҙарса һәләк булды» тигәндәр ҙә, хәрби часының һандарын ғына күрһәткәндәр, — тип ҡағыҙын килтереп сығарҙы килен.

Майкамал тотоп ҡарарға ла ҡурҡты, бармаҡтары өтөлөр төҫлө, ҡағыҙ ғына тиһәң дә, көслө инде ул.

Өс-дүрт көн үткәс, Алмабикәнең килене үҙе килеп инде. Аптырай ҙа бирҙе Майкамал, берәй хәбәре бармы тағы?

— Ғәйнелдән хат алдыҡ, Майкамал апай, улығыҙ иҫән, һеҙгә сәләм әйткән, — тине ҡыуанғандай итеп тә, бойоҡ та.

— Иҫән тиһеңме?.. Ауыҙыңа һары май, ысынмы?

— Бына хаты, үҙ ҡулы менән яҙған, тимәк, иҫән... Хәйрүшем генә бына... Атака ваҡытында пулялар харап иткән, йәне йәннәттә булғыры. — Уҡып күрһәтте хатын Тәнзилә.

— Әй, донъя, ниндәй ҡәһәрле заман, тыныс ҡына йәшәр әмәл дә бирмәй, арыулана тиһәң, икенсе яҡтан килтерә лә бәрә, — тип һөйләнде әсә.

Ҡәйнә-ҡайныһының хәлдәрен һөйләп, Тәнзилә ҡайтырға әҙерләнде. Майкамал апай, ниҙер хәтерләп, туҡтатты уны.

— Шул хатты биреп торсо әле миңә, индереп сығырмын аҙаҡ, Хәлиҙә киленгә уҡытайым тигәйнем.

— Уҡыт, апай, уҡыт. — Тәнзилә өскөл ҡағыҙҙы уға тотторҙо.

Ошо көндән ай тирәһе ваҡыт үтте. Ғәйнелғилеменең иҫәнлеген белеп күпмелер ҡыуаныс табып йөрөгәндә, Хәлиҙә килене ишек асты. Хәйер, быныһы бер ҙә ғәжәп түгел, килендәре көн дә тиерлек килеп йөрөй, ярҙам күрһәтә. Ләкин бөгөн Хәлиҙә бөтөнләй икенсе төҫтә: йөҙө бурһыған, ҡара янып төшкән. Инде лә ҡәйнәһенең күкрәгенә баш терәне.

— Беҙгә лә бәхетһеҙлек килде, әсәй, — тип әрнене. Илгәҙәк килене күберәк «әсәй» тип өндәшә Майкамалға.

— Уф, түҙер хәлдәрем ҡалманы бит... — Килененең йөҙ-ымынан уҡ аңлағайны ҡәйнәһе. — Баҫа бит ауылды шул похоронный, килмәгән көнө юҡ.

— Ғәйнел хаҡында «хәбәрһеҙ юғалды» тигәндәр, — тип аңлатты Хәлиҙә.

— Хәбәрһеҙ юғалды?.. Нисек инде ул, ҡасып киткәнме?

— Белмәйем. Үҙем дә баш ватам.

— Туҡта әле, ҡыҙым, үлде тимәгәндәр бит. Ысынлап та ҡасҡан икән, нәҫелгә юйылмаҫлыҡ ҡара тап төшә түгелме?

— Юҡ, булмаҫ. Коммунист ине, янып эшләне, үҙегеҙ беләһегеҙ...

— Бөтә ауыл белә кем икәнен... Сеү әле, һорашайыҡ ауыл советына барып, — тигән фекергә килде әсә.

— Ниңә ауыл советынан? Мөхәмәтйән ҡәйнештән һорашайыҡ, ул фронт юлын гиҙгән кеше, аңлатыр.

Килененең һүҙендә лә аҡыл бар. Әсәнең иң кесе улы — Мөхәмәтйән, яраланып, ауылға ҡайтып төшкәйне ваҡытлыса. Яралары төҙәлгәс, комиссия тикшерергә тейеш яңынан. Ул экренләп аяҡҡа баҫып килә, аҙбар тирәһендә ниҙер эшләп маташҡан сағы әле.

— Саҡыр әле Мөхәмәтйәнде, инһен өйгә, — тине әсә.

Хәлиҙә солан ишегенән баш тығып ҡысҡырҙы.

— Ҡәйнеш, ин әле өйгә, әсәй саҡыра.

Мөхәмәтйән ҡағыҙҙы ентекләп уҡып сыҡты. Түҙмәне әсә, һорай нығышып:

— Хәбәрһеҙ юғалыуы нимәне аңлата икән? Ҡасып китеүеме әллә һуғыштан?

— Юҡ, әсәй, Ғәйнел ағайым ундайҙарҙан түгел. Үлһә — үлә, илен һатмаясаҡ ул, — тине Мөхәмәтйән.

— Нисек аңларға һуң?

— Бәлки, әсирлеккә эләккәндер, үле кәүҙәһе ергә күмелеп ҡалғандыр. Документы табылмаһа, таныусы булмаһа, «хәбәрһеҙ юғалды» тиҙәр ҙә ҡуялар. Юғалғандар ҙа иҫән булып сыға ҡай саҡта.

Өмөттөң шәмен һүндереп үк ҡуйманы улы, шуныһына ла мең рәхмәт Мөхәмәтйәнгә. Бәлки, ҡайтып та килер, кем белә.

1943 йыл Майкамал апайға, күкте ярып төшкән боҙло ямғырҙай, ҡайғы ишелде. Фәткелғилем, Ҡәнзелғилемдең «ҡара ҡағыҙҙары» бәгерен өҙҙө. Нисек түҙгәндер апай, нисек йөрәге ярылмағандыр — Хоҙайҙың үҙенә генә мәғлүм... Бар ҡыуанысы — Мөхәмәтйәндә, аяҡҡа баҫа башлауына һөйөнә.

Майкамал апай хәсрәттәргә батып, баш баҫып йөрөнө. Тик Мәүлиҙә әхирәте менән осрашҡанда ғына асыла төшә.

— Улдарымды уйлап хыялланам инде, ятҡан һайын береһен, икенсеһен төштәремдә күрәм. Бөгәсә төндә лә бер төш әйләнә лә керә, әйләнә лә керә, һаташып бөттөм. Имеш, йәш саҡ, ҡыҙ ваҡытым, Ҡыйҙаш буйында Мөхәмәтшакир менән осрашырға һөйләшкәнбеҙ. Баҫмаға төшөп көтәм, ә ул юҡ та юҡ. Килде ашҡынып, хәле бөтөп. Көттөрҙөм, ти, ғәфү ит! Үсеккәнгә һалыштым мин. Ул аңламаны ла, буғай, әйҙә, һыу инеп сығайыҡ, тип ҡыҫтай. Һыу шундай матур, таҙа, һөттән дә аҡ. Ҡарыштым, кеше күрер ҙә әллә нимә һөйләр, тим. Ул сисенде лә сумды һыуға. Килеп сығырын самалайым, йылғаның аръяҡ ярын күҙәтәм — ул юҡ һаман. Оҙаҡ көттөм: ай үтте, йыл ағылды, ҡыш булып, йәй килде, һыуҙан башын ҡалҡытманы Шакирым. Ҡартайып та бөттөм, шулай уҡталып, сәсте аҡ ҡапланы. Көтә торғас, беҙҙең йылғаға ҡунаҡлаған ҡыр ҡаҙҙары күренде. Ҡыйҙаш өҫтөнән ҡыйғаҡлашып, теҙелешеп осоп үттеләр. Алдан иң ҙуры — юл башлаусыһы оса. Бер мәл ҙур ҡош телгә килде: мин был, Шакирың, Майкамал, тип ҡысҡыра, имеш. Ул һаман тауыш бирә: малайҙарымды эҙләп оҙаҡ йөрөнөм, бына табып алып ҡайтып киләм... Ҡыр ҡаҙҙары алдымдан ғына осоп ҡанат ҡаҡты, әйтерһең, тәбрикләне, сәләмдәрен тапшырҙы. Илашҡан һымаҡ ҡыйғаҡлашып, Ҡыйҙаш өҫтөнә килеп төштөләр... Ҡысҡырып ебәреүемә уянып киттем.

Майкамал апай күргәндәренең төш икәненә әсенде.

— Хоҙай шомлоғо, нимәгә юрарға мөмкин был төштө?

— Яҡшыға юрарға, — тип йыуатты Мәүлиҙә әхирәте. — Ҡаҙҙар — изге ҡоштар, һыуы ла һәйбәткә, бигерәк тә таҙа, саф күренеүе. Ҡайтып төшөр әле бер заман улдарың да.

— Ҡайтырҙар микән?.. Шакирҙың һыуға батыуы — юғалтыу, улдарын үҙе янына саҡырыу түгелме? — Һиҫкәнде әсә, икеләнде.

— Яҡшыға юра, яҡшыға.  Төштө нимәгә төбәп фаразлаһаң, шуға насип була, тиҙәр. — Мәүлиҙә үҙенекен ҡабатланы.

Майкамалдың күңеленә ышаныс орлоҡтары һибелгәндәй булды, юҡһыныуҙары томан шикелле таралып төштө.

Ауыл халҡын аслыҡ баҫа башлағайны был йылда. Ул яҙын көньяҡтан ҡайтып бер көн эсендә тирәктәрҙе ҡаплаған ҡарғалар ише ҡапыл ябырылманы, йайлап, илде иңләп килде. Кешеләр «ҡара көнгә» тип йыйған иген-ризыҡтарын тотоноп бөттө, арыуыраҡ әйберҙәрен, кейемһалымын юҡ хаҡҡа һатып ебәрер, күберәге аҙыҡҡа алмаштырыр хәлгә етте. Фронтҡа ла аҙыҡ, кейем оҙатыуҙар йышайҙы, өҫтәүенә районда килгән уполномоченныйҙар ҡаҙнаға ит, һөт, май биреүҙе ҡыҫтап, налог түләүҙе, заемға яҙылыуҙы талап итеп боғаҙҙан быуып баралар. Ҡабым тәғәм ҡалмаған ғаиләләр ишәйҙе, өй беренсә темеҫкенеүселәр йөрөй башланы. Кеше ҡайҙа китһен, аҙыҡты тәбиғәттән, Ер-әсәнең ҡуйынынан эҙләргә ҡала.

Яҙҙар етеп, ҡарҙар ереп аҡҡас, еркәй йылы нурҙарға ҡойонғас, ауылдың өлкәндәре лә, бала-сағаһы ла туғайлыҡтарға, уйһыулыҡтарға, йылға үҙәндәренә, урман буйҙарына һибелә ашарға яраған үлән эҙләп. Ундай үҫемлек, әлбиттә, балтырған. Урманда — әтлек тамыры, һарына. Арыҡ аҙымдар менән шуларҙы эҙләп көн үтә, әллә күпме саҡырымдар артта ҡала. Берәүҙәр йыя, артынан икенселәре баҫа, балтырғанҡай баш ҡалҡытырға ла өлгөрмәй, йолҡоп та алалар. Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә тигәндәй, яурындары аша аҫылған ҡапсыҡҡа ниҙер тултырып ҡайталар барыбер. Балтырған ҡата башлаһа, ҡаҡыһы өлгөрә, кәзә һаҡалы, фәрҙә үләне. Улары ашарлыҡтан сыҡһа, ат ҡолағы япрағы, ырҙында алабута, хатта бәрәңге япрағын өҙәләр.

Майкамалдың Мәүлиҙә әхирәтенә килеүенең төп сәбәбе лә шунда ине: аҙыҡ эҙләп юлланыу. Төш  һөйләүе һүҙ ыңғайында фекерләшеү генә.

— Сәй эсерер инем дә, тел аҫтына һалыр шәрбәт тә, бер ҡабыр икмәк валсығы ла юҡ, — тип ыуаланды Мәүлиҙә. — Ҡыҙым да ауырып ятҡас, тере ҡулһыҙ ҡалдым.

— Кисә урыҫ ауылының бәрәңге ырҙынын ҡаҙып ҡайтыусылар булған, кәлжемәлек берәр биҙрә серек бәрәңге йыйғандар икән, — тине Майкамал. — Әллә, мин әйтәм, беҙ ҙә шунда барып ҡайтайыҡмы?

Икеләнгән әсәһенә өндәште Сәлисә:

— Барығыҙ, мин ни, яңғыҙым да ятып торормон өйҙә.

Мәүлиҙә лә дәртләнде.

— Йыйынайыҡ, улайһа, башҡалар ҡаҙып бөткәнсе өлгөрәйек.

Әле ҡар һыуҙары ағып, ер кибенмәгән саҡ. Балтырғанға төшөргә иртә, шулай булғас, күҙ терәгән — серек бәрәңге.

Икеһенең дә аяғында тегенән дә бынан ярылған эрзинкә итек. Ярай әле уныһы бар, сабата ике аҙым үтеү менән аяҡты лысма һыу яһай. Киттеләр күләүектәрҙе урап, тар йырғанаҡтарҙы һикереп 7-8 саҡырымдағы урыҫ ауылына. Ырҙындың артҡы яғынан барып туҡтанылар, уйлашып торҙолар.

— Нишләйбеҙ, кереп рөхсәт һорайыҡмы?
— Әллә инде, анау икәү ҡайһылай иткән икән?
Ике кеше ҡаҙып йөрөй, шуларҙан һорашырға булдылар.
— Ҡаҙығыҙ әйҙә, һорап тормағыҙ, беҙ ҙә килдек тә йәбештек, — тине күрәгенә баҫа-баҫа баш та ҡалҡытмаған ҡатын, — тик икенсе ырҙынды һайлағыҙ, быныһы — беҙҙеке.
— Сығамы һуң? — Ҡыҙыҡһынды Майкамал.
— Сыға, ун метрҙан бер-ике.
Икәүләп бер ырҙынға төшөп, кибеп тә бөтмәгән тупраҡты ҡайырырға керештеләр. Һирәкләп сыға торҙо көҙҙән ҡалған туң бәрәңге.
— Эре бит әй бында, — тине Мәүлиҙә.
— Эре шул, колхоздың анау көндө ҡаҙған бәрәңге баҫыуы ише түгел инде.
Ҡабаланып соҡонолар, башҡалар ябырылғансы ыратып ҡалырға тырышалар. Һыуһау ҙа, асығыу ҙа етте, тамаҡ кибә, эс гөтөрләп китә. Ҡайҙан һыу эсәһең дә, нимә ауыҙыңа ҡабаһың. Асыҡҡанда ябып торорға тура килә инде ауыҙҙы шулай. Бөтә ынтылыш — тиҙерәк биҙрәне тултырыу. Ҡайтҡас, таба тулы кәлжемә бешереп, сәйҙе алҡынғансы эсерҙәр әле. Ауыҙ һыуын ҡойоп, шулай һөйләште өлкәнәйгән ике апай.
— Их, майы ла булһа шунда әҙерәк кәлжемәгә, телеңде йотор инең! — Мәүлиҙә хыял итә. Үҙенең кәзәһенән башҡа бер малы ла юҡ, әмәлгә ҡалғандай, ул да ҡыҫыр.
— Майын берәй ҡашыҡ бирермен мин, аллаға шөкөр, һыйырым быҙауланы, — тип өмөтләндерҙе Майкамал, — ҡайтып ҡына етәйек әле.
Нисә сәғәт үткәндер, уныһын кем һанаған, бер мәл, биҙрә тулып килгәндә, үҫмер егет күренде. Былар янына етте лә, һауа яңғыратып, сыбыртҡы шартлатып ебәрҙе. Ике апай тертләүҙән ҡылт итеп, яурынбашын күтәреп, һикереп ҡуйҙы. Теге егет тартынып та тормай, өләсәһе кеүек кешеләргә яман үкерҙе.
— Кем рөхсәт итте һеҙгә ырҙынды ҡаҙырға?! Өйөрлә ас ҡарға!
Телдәрен тешләп, ҡойолдо ла төштө былар. Ләм-мим. Аңлатып та ҡарар инең, бәлки, был балаға, уның өсөн урыҫ телен яҡшы белеү кәрәк. Атаң урыҫ, инәң мәрйә булмағас, ни хәл итәһең, ауыҙ йоморға ғына ҡала.
Ул арала егет ишараты биҙрәләрен тибеп осорҙо, күрәктәренә йәбеште.
— Алып ҡалам күрәгегеҙҙе, башҡа килмәҫлек итәм мин һеҙҙе!
Күрәген тартҡылауға, һөрәнләп разбой һалды Мәүлиҙә. Майкамал да ҡыҫҡырҙы. Шау-шыу ҡупты. Теге ырҙындағы ҡатындар, күҙ асып йомғансы, табан ялтыратты. Былар хужа малайы менән ыҙғыша. Тауышҡа өйөнән урта йәштәге ҡатын килеп сыҡты. Ул шәп-шәп атлап яҡынлашты, тауышын күтәрә биреп, улына өндәште:
— Туҡтат, Вася, ни ҡыланыуың был, ә?!
— Ҡаҙалар бит, ырҙынды тапайҙар, — тип аҡланды егет.

— Тапаһындар, тупраҡ тапалыр ҙа, йомшарыр ҙа, аслыҡ баҫһа, ни хәл итерһең? — Яҡлашты ла ҡуйҙы мәрйә.

Малайы яйлап артҡа сигенде. Ике өлкән ҡатын биҙрәләренә егет тибеп тараҡкан серек бәрәңгеләрен йыя. Мәрйә ҡатыны ҡыҙғанып ҡарай быларға.

— Аслыҡ шул кругом, һуғыш касафаты инде был, ғазраил алғыры Гитлер! — тип һөйләнде. Унан ҡатын мышҡылдап илап ебәрҙе. — Өсөнсө көн генә өлкән улымдың похоронныйы килде. Һөлөк кеүек егет ине...

Шул йәһәттә үк Майкамал башын күтәрҙе.

— Минең дүрт улым һәләк булып ҡалды һуғышта, — тине, мәрйәне йыуатырға янына барҙы. Бына ҡосаҡлашып илаша ике әсә. Урыҫмы ул, башҡаһымы — ҡайғының милләте юҡ, һәр береһенең йөрәген ҡара көйҙөрә шул инде. Уртаҡ яҙмышлы ике әсә күңелдәрендәге уртаҡ ҡайғы аша аңлашты...

Мәрйә ҡатыны быларҙың ҡайһы ауылдан килеүен һорашты. Ватаемерә аңлатып биргәс, ҡыуанғандай итте.

— Һеҙҙә минең дә знакум бар, Сәхәбетдинов, беләһегеҙҙер әле, колхозығыҙҙа рәйес ине, — тип теҙҙе.

— Беләбеҙ, — тип бер ауыҙҙан яуапланы Майкамал менән Мәүлиҙә, — кем белмәй уны.

— Минең атайымдың дуҫы ине ул, граждандар һуғышында бергә йөрөгәндәр.

— Бик ҡыҙғаныс, был һуғышта ул да ятып ҡалды шул, — тип аңлатты Майкамал ҡайғылы төҫ менән.

— Да, күпме аҫыл ирҙәр ҡырылды... Һеҙ йонсоп та бөткәнһегеҙ, асыҡҡанһығыҙҙыр, әйҙәгеҙ, өйгә инегеҙ, ял итеп алырһығыҙ, — тине асыҡлана төшөп мәрйә. — Әйҙәгеҙ, әйҙәгеҙ, тартынмағыҙ. Минең исемем Аня, танышайыҡ әле.

Инделәр, арыу-талыуҙың сигенә сығып баралар ине. Самауыр шыжлатып ебәрҙе Аня, мейесендәге суйында бәрәңгеһе лә бешкән икән. Өй эсе тәмле еҫ менән тулған, ирендәр үҙҙәренән-үҙе тамшанды.

Оҙаҡ һөйләшеп, тамаҡ туйҙырҙылар. Тамаҡ талаштыра ла, яраштыра ла икән шул. Киң күңелле мәрйә, ҡайтырға йыйынғас, мөгәрәбенән сығарып эре, таҙа бәрәңге лә бирҙе хатта. Ҡыуандылар ҡатындар, ғүмергә етер байлыҡҡа юлыҡтылар тиерһең. Мәүлиҙә Сәлисәһен иҫкә төшөрҙө.

— Ҡыҙыма ашатырмын, исмаһам, тамағына затлы ашамлыҡ ингәс, аяҡҡа баҫыр, сырхауынан ҡотолор, бәлки.

Аня уғата йомартланып китеп, бер ҡыйырсыҡ икмәк тә һондо уға. Юлдары уңыуына ҡат-ҡат рәхмәттәр әйтеп, бер туғандар кеүек ҡосаҡлашып хушлашты ҡатындар.

## Мөхәмәтсафа

Мөхәмәтшакир ағай менән Майкамал апайҙың дүртенсе улы — Мөхәмәтсафа ил гиҙергә, юл йөрөргә яратҡан бер зат булып үҫте. Егет йәшенә етә башлау менән ара-тирә тимер юл станцияһына һуғылғылаңы. Станса алыҫ булмағас, барып ҡайтыуы бер ни тормай. Тәгәрмәстәрен йырлата-йырлата составтар үтә. Ҡайҙа ашыға икән улар? Моғайын, Мәскәү, Ленинград ҡалаларына китәләрҙер. Уларҙың икеһе лә илебеҙҙә иң эре, иң матур ҡала тип яҙалар бит китаптарҙа. Батшалар йәшәгән ҡала матурҙыр, әлбиттә, ҡайһы рәүешле булһын ул тағы! Шуларҙы күрәһе, шунда йәшәйһе ине лә бит, әйгенәм.

Һәр кемдең үҙ хыялы бар, хыялһыҙҙар ғына ҡанаты киҫелгән ҡош кеүек. Ә Мөхәмәтсафаның нәҡ осор сағы, ҡанат нығытып өлгөргән ул. Тот та, ил гиҙеп, сәйәхәткә сыҡ та кит, гүзәл ҡалаларға һоҡланып йөрө!

Тимер юлы тирәһендә өйөрөлә-өйөрөлә, вагондан ҡапсыҡтар бушатҡан ергә барып сыҡты. Шул саҡ тоҡтарҙы һанап, дәфтәренә яҙып тороусы күҙ һалды егеткә.

— Әй һин, ниңә уралаһың был тирәлә? Кил әле бында! — Мөхәмәтсафа баҫты алдына. — Нимә кәрәк һиңә?

— Кәрәкмәй бер ни ҙә.

— Әллә әйбер сәлдерергә самалайһыңмы? Ҡапсыҡ йөкмәп алыҫ китә алмаҫһың... Хәйер, көсөң дә етмәйҙер әле был тоҡтарға, — тип гәп һатты.

— Минеңме көс етмәй! Анау йөкмәгәндә йығыла яҙып аяғы кәңгелдәгән бабайға тиңләйһеңме мине? — Сәмләнде лә китте Сафа.

— Шунан да артыҡ түгелдер, моғайын. Йә әле, көсөңдө күрһәт, килтереп һал бынауында, шунан ышанырмын. — Хәйләкәр абзый ине был, юрый сәмләндерҙе егетте.

Вагондан алып биреүсе бер тоҡто йөкмәтте бит Сафаға. Ҡалҡына биреп иңбашын һелкетте лә, тоҡ йә алға, йә артҡа һөйрәмәһен өсөн урталығын самалап, ыһ та итмәй йүгерә-атлай барып, тигеҙләп өймгә һалды.

Абзый әй маҡтаны быны:

— Икмәкте бушҡа ашамағанһың икән, көс йыйғанһың. Әллә бөгөнгә беҙҙә эшләшеп тораһыңмы, тиҙ бушатырға ҡуштылар вагонды. Эште теүәлләгәс тә аҡсаһын да түләрбеҙ.

Егеткә шул ғына кәрәк тә, күҙҙәре осҡонланды.

— Мөмкинме һуң?

— Мөмкин тим дәһә.

— Була, — тине лә йәбеште Сафа эшкә.

Кискә табан вагон бушатылды. Егет тә арманһыҙ булды, әлбиттә.

Мул ғына аҡса усына килеп кергәс ни, дәртләнде лә китте был.

— Иртәгә лә килергә яраймы?

— Кил әйҙә, эш табылыр.

— Ҡайҙан эҙләргә һеҙҙе, ағай?

— Ана, көпләнеп таҡтаһы бәскә буялған йорт. «Тауар контораһы» тип яҙылған унда. Иртәрәк килһәң, мин шунда өҫтәл артында ултырырмын. Сәйет ағай тип һорарһың.

— Әллә һеҙ баш начальникмы ошонда?

— Баш уҡ булмаһам да, түш. Келәт мөдире мин.

— Ә-ә, шулаймы ни?

— Ә кәк же, кем тип уйлағайның мине?

— Әллә нәмә уйламаным улай... Рәхмәт, Сәйет ағай, иртәгә иртүк килеп етермен, әлләйгәс.

Сафа, аяғы ергә лә теймәй, станса кибетенә йүгерҙе. Бер кило кәнфит, шәкәр үлсәтте, печеньеһын да, сәйен дә һалдыртты. Өтәләнеп ауылға кергәндә, бригадир Ғәйнел ағаһы осраны.

— Бөгөн һине эҙләнем мин, Сафа, өйҙә лә юҡһың, бер кем белмәй, ҡайҙа йөрөнөң уттай эш ваҡытында? Тырмаға сығырға кәрәк бит.

— Мәшәҡәт тыуҙы, — тип мығырланды ҡустыһы.

— Иртәгә, давай, эшкә.

Баш ҡаға бирҙе лә йәһәтерәк айырылышыу яғын ҡараны егет. Өйҙә атаһы ла тырпайып ҡаршыланы:

— Эштән ҡасып йөрөүеңде туҡтат, малай, ҡара уны!

Әсәһе түр өҫтәлдән улы алып ҡайтҡан сәй-шәкәрен күтәреп сыҡты, атаһы менән шатлыҡ уртаҡлашмаҡсы, йәнәһе.

Мөхәмәтшакир ағай ҡыҙып китте:

— Ҡайҙан алдың уны, урлашып йөрөйһөңмө әллә, беҙҙең йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтереп?!

— Юҡ, урлашмайым, ундай эштән Хоҙай аралаһын, эшләп алдым, — тип гонаһы юҡлығын белдерҙе улы.

— Эшләп, имеш, кем шул саҡлы аҡса һалһын кеҫәңә һинең.

— Стансала эшләнем. Тоҡ бушатыштым. — Сафа дөрөҫөн һөйләне.

— Башҡаса аяҡ та баҫма, ана, колхозда эш етерлек! — Ҡырт киҫте атаһы.

Ләкин таң менән Сафа сығып та һыҙҙы. Биле һыҙлаһа ла, мах бирмәне. Сәйет абзыйҙы эҙләп тапты. Бик баһалы ҡиәфәттә ултыра ағай.

— Килеп еттеңме? Үәт, молодец, һүҙеңдә тора беләһең икән!

— Нимә эшләйбеҙ бөгөн? — Түҙемһеҙләнде Сафа.

— Әлегә вагон килеп етмәгән, иптәштәрең дә йыйылмаған. Ашыҡһаң, үҙең генә эшләй тор, әйҙә, күрһәтәм, — тип эйәртеп алып китте егетте мөдир.

Бер келәтте асты. Иҙәнендә ниндәй генә сүп-сар юҡ бының!

— Ошоно таҙартырға, ҡустым, бөгөн киләсәк тауарҙы тултырырға урын кәрәк.

Сүп-сары күп булһа ла, күҙ ҡурҡа, ҡул эшләй. Кереште Сафа. Төшкә саҡлы ялт иттереп ҡуйҙы. Буфетҡа инеп тамаҡ ялғаған арала башҡалар ҙа килеп етте. Станция ҡасабаһында йәшәгәс ни, улар ваҡытын белеп йөрөй.

Төштән һуң келәттәр тапҡырына вагон килтереп туҡтаттылар. Йәнә лә тиҙ бушатыу кәрәк икән. Был юлы дәү-дәү йәшниктәр: печенье, прәник

кеүек әйберҙәр. Перронға тимер арбалар ҡуйып, әй һөйрәйҙәр келәткә, ат һымаҡ. Кискә, һуңлабыраҡ, бынnetworkһын да тамамланылар. Сәйет ағай, ҡағыҙға ҡул ҡуйҙырып, йомарлап аҡса һондо. Келәт таҙартҡанын да ҡушҡас, мулыраҡ та эләкте Сафаға.

Ҡайтырға һуң булып киткәйне инде. Башҡалар таралышты, Сафа йөрөй бирә икеләнеп. Сәйет ағай килеп сыҡты.

— Ниңә ҡайтмайһың, арыманыңмы эшләп? — тип ҡыҙыҡһынды.

— Ҡайтырға йыраҡ бит әле, вокзалда ғына ҡунырғамы икән әллә, тип торам.

— Ниңә, һин ҡайҙан һуң?

— Кәпәйҙән.

— Ҡара һин уны, эш менән ыуарама килеп, һораша ла алманым. Башҡа ауылдан икәнеңде белмәгән инем әле, — тип, ҡул йәйҙе ағай. — Нишләргә хәҙер, ҡайтарып ебәреп булмай бит инде.

Сафа мөлдөрәп ҡараны ағайға, ыңғай кәңәш әйтеүен көттө. Сәйет абзый ҙа йәлләне, күрәһең.

— Әйҙә инде, беҙҙә ҡунырһың, урын етерлек.

Ысынлап та, абзыйҙың өйө иркен ине. Апай ҙа мөләйем, әйҙүкләп ҡаршыланы. Буй еткереп килгән улдары ла йүгереп кенә йөрөп ята. Башҡа балалары бармы — уларын һорашырға уңайһыҙланды Сафа.

Тәмле итеп аш ашап сәй эскәндән һуң оҙаҡлап ултырманылар, көн буйы эшләгән Сафа түшәккә тәгәрәү менән йоҡлап та китте.

Иртән станцияға килһәләр, атаһы ҡаршы алды. Бер аҙ шөрләп тә ҡуйҙы Сафа: ҡайыҙлап ташламаһа ярар ине кеше алдында. Ләкин Мөхәмәтшакир итәғәтле тотто үҙен, Сәйет ағай менән ҡул биреп күреште.

— Минең малай бында эйәләшеп алдымы ни шулай? Ә беҙ уны юғалтып йөрөйбөҙ.

— Эшләргә теләге бар бит, ярҙамлашһын тинем инде. Хаҡы ла матур ғына төшә. — Яҡлашҡандай аңлатты Сәйет абзый.

— Колхозда ла эш етерлек, уттай ҡыҙыу саҡ.

— Колхоз эше ҡасмаҫ әле, унда ла көрәп аҡса алып ятмайһығыҙҙыр.

— Юҡ инде уныһы.

— Шулай булғас, әйтеп торам, бында ярайһы ғына эләгә ул. Быға са аҡса бер кемдең дә эсен тишкәнен ишеткәнем юҡ. Егет елле, уңған, көс бар.

— Үҙебеҙгә лә кәрәк бит әле, — тип ҡырҡыша Шакир ағай.

— Башҡа балаларығыҙ юҡмы ни?

— Бар. Унау.

— Өйөгөҙҙәме? Ай-бай!..

— Ике ҡыҙым, өс улым үҙ ояһын ҡорҙо инде. Өйҙә биш малай.

— Улай икән... Эшләһен, әйҙә, быныһы... Алып ҡайтам тиһәң дә, ҡаршы төшә алмайым.

— Ҡалайым инде, атай, миңә ошондай эш оҡшай, — тип ялбарҙы Сафа.

Мөхәмәтшакир уйынан ҡайта төштө, ахырыһы.

— Әллә инде. Үҙеңә ҡыйын түгелме һуң?

— Түгел, атай, көҙгә уҡырға китермен тип тә уйлайым...

— Уҡыу яҡшы нәмә инде, — Сәйет абзый йәнә егет һүҙен йөпләне. Атай күнде улын ҡалдырырға.

— Һаҡ йөрө улайһа, теләһә кем менән буталана күрмә тағы! — Атаһы ҡаты ғына иҫкәртеп тә алды.

— Ундай егеткә оҡшамаған ул, һуңға ҡалған хәлдә миндә йоҡлар. Борсолмағыҙ. — Сәйет ағайҙың һүҙе һөйләшеүгә нөктә ҡуйҙы.

Атаһы ҡайтыу яғына барғанда, Сафа артынан йүгереп барып туҡтатты.

— Бына, бер аҙ аҡса бирәм, буш ҡул менән ҡайтма инде, күстәнәс ал әсәйгә, — тип, атаһының йылы усына ҡағыҙ аҡсалар һалды.

Ике айҙан ашыу ошонда эшләп йөрөнө Мөхәмәтсафа. Аҡсаһы ла йыйылды хәтһеҙ генә. Ә күңеле ашҡыныуҙан туҡтаманы. Поездар үткәнен ҡарай ҙа, бойоғоп ҡуя: әх, шуға ултырып, ҙур ҡалаларға барып төш ине, ә!..

Шулай йөрөнө-йөрөнө лә бер ҡарарға килде Сафа: китергә, Мәскәүгә барырға ла төшөргә! Күҙ күрер һуңынан... Атай-әсәйгә әйтергә башта, өндәшмәй юғалыу — бәғерһеҙлек ул. Былай ҙа ҡайғырышып йәшәп ятҡан ерҙәре. Ҡайтты ла әйтте:

— Мин уҡырға китергә уйланым, атай.

— Ҡайҙа, кем ебәрә һине?

— Мәскәүгә. Үҙем барып урынлашам.

— Мәскәүгә?.. — Аптырашты атай-әсәй. — Кем һине көтөп тора унда?

— Көтмәһендәр, ә мин барам.

Ныҡыш Сафа алдына алғанын эшләмәй ҡуймаҫын белә Мөхәмәтшакир. Шуға ла һүҙҙе ары ҡуйыртманы.

Икенсе көндө китте лә барҙы Сафа поезға ултырып. Мәскәүҙә ғәләмәт икән дә! Ҡайҙа ҡарама, кешегә төртөләһең, әллә ҡайҙа ҡабаланалар шул тиклем, сабалар ғына тегеләй ҙә былай. Өҫкә ауып килгән бейек-бейек йорттар, ҡайһыһына инеп эш һорарға, берәү ҙә һине индермәй, ҡул ғына һелтәп ебәрәләр. Малай-шалай ҙа туп-тулы, уның ише егеттәр ҙә һәптәнләп йөрөп ята. Улар ҙа эш эҙләйме, йәбе килһә, ниҙер сәлдерергә уралалармы? Көн буйы йөрөй ҙә Сафа, вокзалға инеп ҡуна. Унда ла тынғы юҡ, милиция халҡы эскәмйәгә ултырырға ла рөхсәт итмәй, шпана тип, ҡыуа ла сығара.

Сафа шпанаға оҡшамағас, артыҡ бәйләнмәнеләр, һораһалар, поезд көтәм, тигәнгә ышандылар. Ләкин барыбер йәйелеп йоҡлап ятыр әмәл юҡ. Шулай вокзалда ҡунып йөрөгәндә, мосолман абзыйы янына тура килгән бит урыны. Сафаның нишләп йөрөгәнен һораша башланы абзый. Егет уҡырға инергә кәрәклеген әйтеп һалды.

— Мәскәүҙә ябай ауыл кешеһенә урын табылыр микән? — тип баш сайҡаны абзый. — Мин дә һинең кеүек теләк менән Ленинградҡа киткәйнем заманында, хәҙер рәхәтләнеп эшләп ятам.

— Һеҙ Ленинградтанмы ни? — тип йәнләнде Сафа. — Миңә лә урын табылмаҫмы шунда?

— Ихтимал, табылыр ҙа.

Һөйләшә-һөйләшә, ныҡлап танышты былар. Ағай Һамар яғынан икән, Хәмиҙулла исемле.

— Мин ҙур заводта эшләйем. Трактор заводы ул, ишеткәнең дә барҙыр әле?

— Бар, — тип фәстерҙе Сафа.

— Шунда һинең кеүек йәштәрҙе уҡырға йыялар, слесарь, башҡа һөнәр буйынса.

— Мине лә эйәрт, Хәмиҙулла ағай, уҡырға бик теләгем бар.

Шулай итеп, көтмәгәндә бәхет йылмайҙы Сафаға. Ағай менән Ленинград поезына ултырҙылар. Сафаны Хәмиҙулла ағай өйөнә үк алып ҡайтты. Икенсе көндө заводҡа эйәртеп алып килде, үҙе һөйләште уҡырға урынлаштырыу тураһында. Алдылар Сафаны. Дөйөм ятаҡтан урын да бирҙеләр. Бер йыл эсендә ул бына тигән слесарь һөнәренә өйрәнде. Хәмиҙулла ағайҙарҙы ла ташламаны, йыш барып йөрөнө. Был ғаилә уны үҙ итте. Эсеп, аҙып-туҙып йөрөгән егет түгел, тәртипле, өлгөр эшсе — килешмәгән ере юҡ, бынамын тигән! Ғәлимә еңгәй ҙә эйҙүкләп ҡаршылай.

Бер барғанда ҡунаҡ ҡыҙы ла килгәйне уларға.

— Апайымдың ҡыҙы — Әминә, — тип таныштырҙы хужабикә. — Үҙебеҙҙең Һамар яғынан.

Тәүге күреүҙә үк был ҡыҙ ниндәйҙер яҡынлығы менән тартты Сафаны. Был йортҡа килеүе йышайып китте егеттең. Әминә лә уҡырға урынлашты, тегенсе булырға. Йылдан ашыу ваҡыт үтеп тә китте осрашыуға. Сафа менән Әминәнең юлдары гел киҫешеп торҙо. Өйләнешергә вәғәҙә бирешеп, Хәмиҙулла ағайҙарҙың фатихаһын һорарға барып инделәр. Ғәлимә апай ҙа, Хәмиҙулла ағай ҙа тәкдимде кире ҡаҡманы.

— Беҙ һиҙенгәндәй итә инек инде. Үҙ кешеләрҙең табышыуы бик хуп, бәхетле йәшәгеҙ, — тинеләр ҡыуанышып.

Оҙаҡламай ағай менән апайҙың фатирында түңәрәк кенә табын ҡороп, туй ҙа яһап ҡуйҙылар. Йәштәргә дөйөм ятаҡтан айырым бүлмә бирҙеләр. Киләсәктә фатир ҙа вәғәҙәләнелә, донъялар имен булһа әгәр...

Татыу ғаилә барлыҡҡа килде. Һәйбәт бажам бар тип, Хәмиҙулла ла ҡыуана, Ғәлимә лә кейәүе өсөн өҙөлөп тора. Ситтә туғандарҙың ҡәҙере бермә-бер арта бит ул. Ҡыҙҙары тыуғас, Сафаларҙың тар бүлмәһе лә иркенәйгәндәй күренде. Бажа менән ҡәйенбикә ҡунаҡҡа килеп, бергәләп ҡыуаныс кисерҙеләр балаға бағып.

Талпынған ҡошсоҡтай күрҙеләр атай менән әсәй йәнкиҫәккәйҙәрен. Йоҡлап китһә, күҙен асҡансы һағынып өлгөрәләр. Һәй, күңелле йәшәгән, тормош тип атлыҡҡан замандар!.. Кем уйлаһын барыһы ла зил-зилбәр килер тип бер арауыҡта... Һуғыш ғәрәсәте ерҙе ҡара көйҙөрә, гөрһөлдәтеп, ҡалаларҙы ишеп төшөрә...

Ленинградҡа ла ҡурҡыныс көндәр килде. Ниндәй көндәр һуң әле, ай-һай!.. Шунда уҡ Сафа, һалдат кейеме кейеп, оборонаға баҫты. Нисек тә ҡыҙы менән Әминәһен бынан алыҫҡараҡ оҙатыу юлын эҙләне. Әминәһен өгөтләй башланы.

— Ҡайтырға кәрәк һеҙгә, дошман көн-төн бомба яуҙыра ҡалаға, меңәрләгән кеше һәләк була, балабыҙҙы һаҡлайыҡ, — тип, хафалы уйҙарға бирелде.

— Ҡайҙа ҡайтайыҡ, әсәйемдең вафатын беләһең, башҡаса кешем юҡ ауылыбыҙҙа.

— Беҙҙең ауылға ҡайтаһың, әсәйем яңғыҙ унда, туғандарым һуғышҡа китеп бөткән, атай гүр эйәһе.

Ир хәстәрле — ҡатын баҫтарлы, Сафаның уларҙы ҡыҙғанып, ғүмерҙәрен һаҡларға тырышып әйткәндәрен кире ҡағып буламы — тиҙ аңланы Әминә, ҡосаҡлашып, хушлашып, юлға әҙерләнделәр.

— Һуғыш бөткәс тә ҡайтып алырмын үҙегеҙҙе, — тип оҙатты Сафа ғаиләһен.

Ләкин Ленинградты обороналау, фашистар блокадаһын йырып олаҡтырыу айға түгел, йылдарға һуҙылды. Сафа фашистар ябырылған заводты һаҡлап йән аямай һуғышты. Пулково обсерваторияһы янында ҡайнаған утлы өйөрмәгә лә ташланды. Изге ҡаланы һуғышсылар ғына түгел, ҡала халҡы ла яҡлап фронт һыҙығына баҫты. Ҡала тирәләй киң траншеялар ҡаҙылды, нығытмалар төҙөлдө. Ул эштәрҙә кешеләр һөйләп аңлатмаҫлыҡ сабырлыҡ, ихтыяр көсө күрһәтте. Аслыҡтан хәле бөтөп күпме кеше ҡырылды. Ҡыҙғаныс, йөрәк ярғыс ҡыҙғаныс ине эргәңдә йөрөгәндәрҙең тәгәрәп йән биреүҙәре... Өлкән йәштәгеләр, сабыйҙар яҡты донъянан китә... Дошманға туҡтауһыҙ пуля яуҙырып та үс ҡандырырлыҡ түгел, үкереп илап та йөрәк ярһыуын баҫыр әмәл юҡ. Шул оборонала Хәмиҙулла ағайҙың да ятып ҡалғанын ишетте Сафа.

Ажарлы алышта дошман боғаҙын сәйнәрҙәй булып ташланған Мөхәмәтсафаның да тәндәре теткеләнде... Был 1944 йылдың ҡышы ине...

## Әсә

Улдарынан хаттар-хәбәрҙәр көтөп зарыҡҡан әсә янына көн дә тиерлек бригадир ҡыҙ Сания инеп сыға. Колхоздың мөшкөлгә терәлә барыуына зарланып та ала.

— Нишләйек инде, ер ҡарҙан әрселеп бөтөп бара, беҙ һаман сәсеүгә әҙер түгелбеҙ. Баҫыуҙы һөрөр өсөн аттар арыҡ, район бүлгән орлоҡто ла ташып булмай. — Йәш ҡыҙ илар сиккә етә.

Майкамал апай ҙа баш вата: нисегерәк ярҙам итергә һуң? Хәтер йомғағын һүтеп, колхозда нимәләр барын барлай.

— Ике бәләкәй трактор ҙа эшләп йөрөй ине элегерәк, ҡайҙа булды һуң улар?

— У-2 тракторын әйтәһеңме, апай? Ул ике кәзә тәкәһен МТС-ҡа ремонтларға ебәргәйнеләр, кире ҡайтарғандары юҡ әле. Хәйер, ул трак-

торҙа эшләр кеше лә ҡалманы, Ғиләж менән Фитратты һуғышҡа алып киттеләр бит.

— Шулай шул. Әллә ни ыратмаһалар ҙа, тырыш егеттәр ине, — тип хәтерләне Майкамал. — Ни ҡылырға икән?.. Туҡта, ике-өс ҡыҙҙы өйрәтеп булмаҫмы? Башҡа яҡта эшләй буғай ҡыҙ-ҡырҡын.

— Кәрәк тә бит, колхоз рәйесе бер ҙә ҡуҙғалған әҙәм түгел. Әйтеп тә ҡараным, ҡыл да ҡыбырлатмай.

— Йүнһеҙ әҙәм икән, — Майкамал апайҙың асыуы яман, әллә ниндәй һүҙҙәр менән әрләй үҙен. — Әйҙә барайыҡ янына, бер-ике ҡатынды, Зәйнетдин ағайҙы алайыҡ та, һөйләшәйек әле.

— Улай итһәң, миңә үсләшер бит. Күңелендә асыу һаҡлап йөрөткән әллә ниндәй бер бәндә ул. Ситтән килгән — ситкә ҡарай инде, — тип, Сания рәйес итеп килтерелгән егеттең кемлеген иҫкәртте.

— Башта үҙебеҙ барып һөйләшәйек, уның колхозы түгел бит, беҙҙең колхоз. —Майкамал апай елләнеп, кешеләр йыйырға сығып китте.

Рәйес вазифаһында эшләп ултырған егет һалҡын ғына ҡаршыланы быларҙы. Нимәгә килгәндең айышына төшөнмәҫ борон битәрләргә тотондо:

— Нишләп йыйылышып йөрөп ятаһығыҙ, эшегеҙ юҡмы ни һеҙҙең? Иген давайлашып килһәгеҙ, алдан уҡ иҫкәртәм: кешегә ашатырға түгел, сәсергә ҡайҙан табырға ла белмәйем, бер ус та, йөҙ грамм да бирә алмайым.

— Ашарға һорамайбыҙ, колхозды нисек ҡотҡарырға тигән уй менән килдек, — тип һүҙ башланы Майкамал апай.

Артабан рәйесте эште ойоштора белмәүендә ғәйепләп ташланылар. Һауалы теге лә:

— Мине райком ҡуйған, уның алдында яуап бирәм, һеҙҙең һәр берегеҙ алдында иҫәп-хисап тотаһым юҡ, — тип кенә ебәрҙе.

— Беҙҙең менән дә иҫәпләшергә тура килер, колхоз беҙҙеке. — Элегерәк, йәшерәк ваҡытында, идара тирәһендә эшләштереп алған Зәйнетдин ағай ҙа бирешмәй, яуабы әҙер. — Райкомға ла барып сығырбыҙ беҙ, әгәр кәрәк икән.

Майкамал апай ҙа һүҙһеҙ ҡалманы.

— Беҙ хужалыҡ мәнфәғәтен яҡлап йөрөйбөҙ, кем, улым, аңлайһыңдыр, моғайын, — тип башлағайны, бүлде хужа уны:

— Мин һеҙҙең улығыҙ түгел, Рәфҡәт Сәйет улы тип йөрөтәләр мине.

Дорфалығы ғәжәпләндерҙе лә, асыуҙарына ла тейҙе килеүселәрҙең.

— Белдерергә кәрәк райкомға, барырға, — тиештеләр.

— Юлығыҙ таҡыр, һеҙҙең мыңғырлағанды кем тыңлар унда?

— Тыңларҙар, райком тигәс тә, унда ла әҙәм балалары эшләй торғандыр... Бер ат егергә рөхсәт итегеҙ, китәбеҙ беҙ, — тип ныҡышты Зәйнетдин ағай.

— Ялыу менән йөрөгән кешегә ат тоттороп ҡуйғандарын ҡасан күргәнегеҙ бар? Ат юҡ... эш өсөн дә. — Рәйес һөйләшеү тамам тигәнде ишаралап, ишек яғына күрһәтте.

— Үҙегеҙҙекен бирегеҙ, — тип тә ҡараны Зәйнетдин ҡарт.

Бер башлағас, туҡтамайбыҙ инде, тип сәмләнеп, Зәйнетдин ағай менән Майкамал апай районға йәйәүләп китте. Уларҙы райком секретары Камалетдинова бөтөнләй икенсе рәүештә ҡаршыланы. Иғтибарлап тыңланы быларҙы. Рәфҡәт Сәйет улы хаҡында ҡыҫҡаса ғына аңлатып үтте:

— Урта белемле егет булғас, үҫтерергә теләгәйнек тә бит, бронь юллап, һуғышҡа ла ебәрмәй ҡалдырҙыҡ, комсомол райкомына эшкә алып. Атаһы Сәйет ағай булдыҡлы кеше ине, юғиһә, станцияла келәт мөдире булып эшләне, йөк бушатыусылары ҡалмағас, көн буйы үҙе ҡапсыҡ ташып, өҙлөгөп, әрәм булып ҡуйҙы шул. Атаһынан күргән — уҡ юнған, тигән уй менән улын һеҙгә ебәргәйнек, яңылышҡанбыҙҙыр, күрәһең. — Өҫтәлгә ҡәләмен һуҡҡылаты ҡатын. — Үҙегеҙҙә кеше табылырмы һуң колхозды етәкләрлек?

— Табылыр. Йәш бригадир ҡыҙыбыҙ бар. Һуғыштан яраланып ҡайтҡан Мөғәллим Вәлиев та эшләрлек, һуғышҡа саҡлы ла идарала ине, — тип бармаҡ бөктө Майкамал апай менән Зәйнетдин ағай.

— Уныһын ҡарарбыҙ, ошо көндәрҙә барып сығырмын. Хәҙергә мөһимерәктәрен хәл итәйек. — Секретарь телефонға үрелде, кемгәлер тиҙ генә инергә өндәште.

Сәсеү орлоғо мәсьәләһен һөйләшеп, Майкамал апайҙың тәҡдиме буйынса, ҡатын-ҡыҙҙар станциянан елкәләренә йөкмәп ташырға килешкән арала, ир кеше ишек асты. Секретарь шунда уҡ һорау ташланы уға:

— «Ҡыйҙаш»тың У-2-ләре ниндәй хәлдә әле?

— Рәткә килтереү өҫтөндә. Уларҙың тракторсылары ҡалмаған, ҡайһы хужалыҡҡа бирәйек?

— Курс ойоштороп, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә өйрәтеп булмаҫмы бер нисә кешене?.. — Өҫтәп ҡуйҙы секретарь: — Ҡатын-ҡыҙҙы.

— Хәҙер ҡатын-ҡыҙға ҡалды инде, башҡа колхоздарҙа ла шулай эшләйҙәр.

— Һеҙгә иртәгә иртүк «Ҡыйҙаш»ҡа юлланырға кәрәк. Тиҙ генә курсҡа килтерегеҙ теләүселәрҙе. Аяҡ аҫтында ут уйнар көнгә терәлгәнбеҙ, сәсеүҙе өҙһәк, берәү ҙә ғәфү итмәҫ беҙҙе.

Секретарь Камалетдинованың төплө фекерле, мәсьәләне кисекмәҫтән хәл итеүенә осҡонланып, ҡайтырға ҡуҙғалғас, ҡатын яңынан туҡтатты быларҙы.

— Ниндәй транспорт менән килдегеҙ һеҙ?

— Тәпәй тура ат менән, — тип йылмайған булды Майкамал.

— Бер минутҡа ғына көтөгөҙ әле.

Минут самаһынан йәш егет инде.

— Апай менән ағайҙы «Ҡыйҙаш»ҡа ғына илтеп кил инде, йәме? — Егеткә эш ҡушып, былар менән ҡул бирешеп хушлашты секретарь.

Машинала елдереп кенә ҡайтып төштө Майкамал менән Зәйнетдин.

Вәғәҙә — иман. Икенсе көндө МТС директоры үҙе һөйләшеп, Хөршиҙәне, Ғәтифәне, Зөлҡағиҙәне курсҡа алып китте. Бер нисә көндән

Камалетдинова килеп, ат һарайын, ферма малдарын, ҡайһы бер баҫыуҙарҙы ҡарап йөрөгәндән һуң, ҡыҫҡа ғына йыйылыш үткәреп, Мөғәллимде колхоз рәйесе итеп ҡуйҙылар.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөкмәп орлоҡ ташыуы дауам итте. Еңел түгел ине көн дә район менән ауыл араһын үтеү. Ҡайһы берҙә төпкөлдәге ауылдарға ла юлландылар. Аяҡта, әлбиттә, сабата. Сабата шәп атлата тип, күңел төшөрмәҫ өсөн көлөшә-көлөшә барһалар ҙа, йөҙлөккә саҡлы шыр һыуға мансылып ҡайталар. Яҙғы ташҡын ваҡыты бит инде, күләүектәр, ваҡ йылғалар юлды быуа. Сабатаһы ла сыҙамай: бер-ике барҙыңмы — «сәскә ата», туҙып, йүкәләре өлтәҫләнеп сыға. Яңыһына аҡса еткереп булмай, уның өсөн берәүҙәр йомортҡа менән, һыйыры булғандар, ауыҙынан өҙөп, май менән түләй. Фронт йөгө генә түгел, тоҡтар ҙа баҫты ҡатын-ҡыҙ елкәһен. Ас көйө, бер тәғәм ҡабырға зар-интизар булып, орлоҡ ташыуҙары елек майын һурҙы ғына инде... Күпмелер саҡырым үткәс, билдәле урында бер аҙ ял итмәй мөмкин дә түгел.

Ҡалҡыу ғына урынға ҡунаҡлап, ҡапсыҡтарына арҡа терәп туҡталғанда, ҡатын-ҡыҙ күберәген һағыштарға сорнала. Кемдәрҙеңдер ире һуғышта, ҡайһылары ире әйләнеп ҡайтыуҙан төңөлгән, сөнки похоронный алған, йәш-елкенсәк һөйгән егеттәрен һағына, ә Майкамал апай һигеҙ улын күҙ алдынан үткәрә. Өҙә баҫыр, өрлөк кеүек дүрт улы башҡаса был юлдарҙан үтә алмаҫ инде. Ҡалған дүртәүһе ни хәлдә, ҡайҙа ташланы икән уларҙы елдәр? Кәшбел менән Мөхәмәтйәненең яҙмышы бер аҙ асыҡлана төштө, яраланып, госпиталдә ятыуҙары тураһында хаттары килде. Һауыҡҡас, йәнә һуғышҡа китәсәкбеҙ тип, әсә күңелен һиҫкәнеүгә һалғандар. Икәүһенән киткәне бирле ҡош телендәй ҙә хат-хәбәр юҡ.

Майкамал апай ауыр уйҙарын күңеленән елгәрергә тырыша, әлбиттә. Тик уларҙы нисек осормаҡ кәрәк, көш тиергә, ҡош түгел шул. Улдарын онотоп торһа, Шакиры иҫкә төшә. Уны һуңғы тапҡыр ошо юлдан Мөхәмәтйәне менән дауаханаға илткәйне. Һуңғы үтеү, һуңғы юл... Бына ғына һымаҡ, ә күпме һыуҙар аҡҡан шунан бирле...

Ҡатындарҙың ҡайһы берҙәре көй көйләгән була. Икенселәре тормош-көнкүреш тураһында гәпләшә. Һәр кем үҙенсә кисерештәрҙә ҡайнай.

Ғәҙәттә арыған кеше алға, ҡайтыр юлға күберәк ҡараусан, күпме юл үтәһе барлығын самалай. Шулай ҙа артта ҡалғанына ла күҙ һалып ҡуя. Ошолай ял итеп ултырғанда, берәүҙең көскә аяҡтарын һөйрәп яҡынлашҡанын күрҙеләр.

— Кем булыр был? Меҫкенкәй, саҡ-саҡ ҡуҙғалып килә.

Бөтәһе лә юлға баҡты. Аһ-аһ, ҡатын-ҡыҙ заты бит был! Ана аҡ шәле елгә елпелдәй. Әллә бала ла күтәргән инде?.. Аптырашты орлоҡ ташыусылар. Ят ҡатын улар янына килеп туҡтаны. Түбәнселек менән иҫәнләште.

— Ҡайҙа бараһың, һеңлекәш? — тиеште орлоҡсолар.

— Ултырып кит, ял ит, — тинеләр быға.

— Уй, өҫтөңдә лә йоҡа, аяғыңда туфли генә. Бала ла күтәргәнһең, — тип тә ғәжәпһенделәр.

— Миңә Кәпәй-Ҡобау ауылына кәрәк ине. Алыҫмы әле? — тип һалды йәш ҡатын.

— Арыу ғына тәпәйләһе бар... Ҡайҙан киләһең һуң ауылдың алыҫлығын да белмәй? — һораша башланы ҡатындар.

— Йыраҡтан шул, Ленинград ҡалаһынан. Тәүге килеүем, — тип яуаплауға, Майкамалдың йөрәге жыу итеп ҡалды.

— Бәрәк!.. Әллә минең килен микән?

Асҡан ауыҙын ябырға ла өлгөрмәне, ҡатын аныҡлыҡ индерҙе:

— Майкамал Латиповаларға килешем.

Бөтәһе лә бер юлы Майкамал апайға боролдо.

— Бына ул үҙе, әллә танымайһыңмы? — тине өлгөрҙәрҙең береһе.

Майкамал апай ҡаушай-ҡаушай аяғөҫтө баҫты.

— Әллә һин Әминәме?

— Әсәй! — Һын турайтты ҡатын.— Мин, ҡәйнәм!

— Әй, ҡыҙым, әй, киленкәйем!..

Ҡул йәйеп ҡосаҡлаштылар ҙа йәбештеләр бер-береһенә. Шунан ейәнсәрен ҡыҫты ҡосағына апай. Өс-дүрт йәшлек кенә ҡурсаҡтай ҡыҙ бала.

Башҡалар һорашырға кереште.

— Нисек унда — Ленинградта?

— Һуғыш бара, көнөнә әллә нисә тапҡыр бомбаға тоталар. Бар халыҡ ҡаланы яҡларға күтәрелде, — тип һөйләне Әминә.

— Мөхәмәтсафам һуң ни хәлдә? — Әсә лә һорашыуға күсте.

— Һуғышта ул, фашисты заводҡа яҡын килтермәй, көн-төн алышалар. Хәҙер нисектер инде...

— Күптән киттеңме һин унан?

— Айҙан артты. Юлда ыҙаланған михнәттәрҙе беҙҙән башҡа эт тә күрмәҫ, моғайын.

— Ай, балам, балам...

Кисләтеп ауылға инделәр. Игенен үлсәтергә тәүҙә Майкамалды үткәрҙеләр. Әлбиттә, былай ҙа билдәле күпме йөкмәп ҡайтканы, һәр береһенең ҡулына ҡағыҙ тотторолған. Ләкин үлсәргә кәрәк, юлда услап ашап ҡуймағанмы, йә берәй янсыҡ йәшермәгәнме? Бөртөгө ҡәҙерле шул, бик ҡәҙерле, ул ауыл халҡының аҙығы ғына түгел. Хәйер, игенен үҫтереп алғас та колхозсыға мыҫҡаллап ҡына эләгә, барыһы фронт өсөн, илде һаҡлап ҡан ҡойған яугирҙәр өсөн. Ауыл халҡы нисек тә түҙер, боҙло окоптарҙа ятҡандарҙы, ут-һыу кискәндәрҙе һаҡларға кәрәк. Үлсәүҙәрҙең бөтә ғилләһе бына ошонан ғибәрәт ине.

Орлоҡто тапшырғас, өйгә ашыҡтылар. Өй яғылмаған, һыуыҡ. Әсә яңғыҙ, килендәре, ҡыҙҙары эштә, берәү ҙә бушамаҫ мәл. Һыйыры ла, бәрәсләгән ике кәзәһе лә тауыш бирә. Тауыҡтары ла итәккә осоп ҡунырҙай аяҡҡа урала.

Тиҙ генә мейесенә ҡалдыҡ-боҫтоҡ утын яғып ебәрҙе әсә. Һыйырын һауырға йүгерҙе. Яңы һауған һөт менән ейәнсәрен, киленен һыйланы.

Табала бер нисә кәлжемә йәймәһе лә шыжлатып алғайны ла, ул ризыҡты килене оҡшатып етмәне. Ейәнсәре Нурия ғына урт тултырып сәйнәне.

Әсә эшен бөтөргәнсе төн етте. Иң һуңынан һыуға барып ҡайтты. Ҡыҙыҡай йоҡлап киткән. Килен һаман иҫ йыя алмай, аптырап ултыра.

— Бына шулай инде, килен, яңғыҙға ял юҡ, йүгерәһең дә йүгерәһең, — тине, хәл йыйырға ултырғас.

— Хәҙер яңғыҙ түгелһең, әсәй. Сафа һуғыштан әйләнеп ҡайтҡансы, беҙ ошонда йәшәргә тип килдек. Улығыҙ шулай ҡушты.

— Йәшәрбеҙ, Алла бирһә, илдә сыпсыҡ үлмәй ул. Иҫән-һау ҡайтһын ғына Мөхәмәтсафа улым! — Оҙаҡ һөйләшеп яттылар.

Иртән Сания килеп тә еткән.

— Майкамал апай, ҡунаҡ килгән тинеләр һеҙгә, борсоһам да, инеп сығайым.

— Килен ҡайтып төштө шул ҡыҙы менән Ленинградтан.

— Бөгөн, апай, станцияға бармаҫһың инде әләйгәс. Кисә ике тракторҙы худҡа ебәрҙеләр. Арба әтмәләп, шуның береһе орлоҡ артынан китә, ял итеп ал, арығанһыңдыр, — тип, эштән бушатыуын белдерҙе бригадир.

Ял бик урынлы ине. Утыны булмағас, лапаҫ өҫтөндәге кәртәләрҙе төшөрөп, ярғыслап, мунса тоҡандырып ебәрҙе әсә. Килен дә тик тормаҫын аңлатты.

— Һыуҙы ҡайҙан килтерергә? — Көйәнтә, күнәк күтәреп сыҡҡан.

— Ҡуй, балам, үҙем ташырмын, унда туфли кейеп барып булмай ул. — Ҡәйнә ҡаршы төштө.

Барам да барам тип ныҡышҡас, Майкамал апай йыртыҡ эрзинкә итеген кейҙерҙе килененә.

Ул һыу ташыған арала бер тауығын Шәмси ҡарттан салдыртып, аш та һалып ебәрҙе. Ярай әле Аня биргән ике-өс бәрәңгеһе ҡалған. Бер ус ондан туҡмас та ҡырҡып, бына тигән тәмле аш өлгөрттө.

— Бары менән байрам, килен, — тип ҡыҫтап-ҡыҫтап һыйланы киленен. Бәләкәй ҡыҙына тауыҡ бото тотторҙо.

— Һурылғанһың, балам, көс кереп китер, — тип ашатты.

Көндәр тәгәрәп торҙо, мәшәҡәтен елкәгә өйөп. Яҙғы сәсеү ҙә артта ҡалды. Һабан һөрөргә ҡатын-ҡыҙҙар ҙа сыҡты. Сәсәй-сәсәй тракторҙар ҙа эшләп маташты, әллә ни кинәндермәһә лә. Ир ҡулы кәрәк ине шул. Ярай әле колхоз рәйесе Мөғәллим техниканың аҙ-маҙ рәтен белә. Кәҙә тәкәһендәй генә ике тракторҙы һүтә лә йыйып бирә, Хөршиҙә менән Зөлҡағиҙәгә туҡый-туҡый өйрәтеп. Тегеләр ултырҙымы — тағы сәсәй ҙә шып туҡтай трактор. Йөрәктәре әрнеп, илашып бөтә ҡыҙҙар. Тағы Мөғәллим ярҙамға килә. Тырыша торғас, ҡыҙҙар ҙа төшөндө, буғай, тырылдығы артты тимер аттың.

Сәсеүҙән һуң утауға төштөләр. Бында әсә, килен, кескәй Нурия ла йөрөнө. Юҡ инде, көн буйы бала менән ниндәй эш ҡыраһың, интектереү генә был бәләкәсте. Унан ары Хәлиҙә килененә ҡалдырырға тура

килде ҡыҙҙы, уның ҡул араһына инә башлаған балалары янында мыжымаç, әүрәр тиештеләр. Шулай ҡала килене лә эшкә күнегә барҙы. Утау араһында өйрәлек үләнен дә йыйып ҡайталар. Һәр кем үҙ ризығы менән тигәндәй, табылып тора.

Тырышып-тырмашып донъя көтөп ятҡанда, тағы бер шатлыҡ балҡыны Майкамал апайҙың өйөндә. Иң кесе улы — Мөхәмәтйән ҡайтып төштө. Халыҡ йыйылып китте, һорашалар: иремде осратманыңмы, оҙаҡҡамы, бөтөнләйгәме? Һуғыш хәлдәрен һөйләргә ҡушалар. Яралы һалдаттың сәләмәтлеге шәптән түгел ине. Оҙон-оҙаҡ һөйләшерлек әмәле ҡалмаған, ҡыçҡа яуаптар менән сикләнде: эйе, юҡ, яралар төҙәлгәнсе ҡайтарып торҙолар. Мөғәллим дә инеп хәл белеште. Һәр кемдең үҙ ҡайғыһы: колхоз рәйесенең ҡыҙыҡһынғаны — эшкә ярарлыҡмы был? Хәле ауыр икәнен күргәс, Майкамал апайҙың ҡолағына шыбырланы:

— Бер килограмм ғына булһа ла арыш яҙҙырып ал, ҡул тирмәнендә он итерһең.

Әсә улын яҡшыраҡ тәрбиәләргә тырышып, бер кәзәһен салдыртты.

— Орғасы бәрәсе ҡала, көҙгә кәзәгә әйләнер, — тип кенә ебәрҙе.

Көҙөн яралы Кәшбелғилем улын ҡаршыланы әсә. Уның да хәле мөшкөл ине. Әсә өйө яңынан йәнләнә барҙы.

## Фәтҡелғилем

Фәтҡелғилем бәләкәйҙән үк уҡырға тартылды. Ҡулына ниндәй китап эләкһә, айырыла алмай теклəр ҙə ултырыр ине. Көндөҙөн китапҡа йәбешер форсат юҡ юҡлығын, Мөхәмәтшакир ағай менән Майкамал апай балаларының һәр береһенә эш табып, юҡты бушҡа ауҙарырға һис ирек бирмәç. Йорт-ҡурала ла мәшәҡәттәр тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел: әле кәртәне рәткә килтерергә, урамды һепереп сығырға, мал аҙбарын таҙартырға, башҡаһы... Бер тотонһаң, баш күтәрергә лә әмәл юҡ, эйел дә бөгөл көн буйына. Ҡаты ҡуллы ине аталары: «эшең — кеше өсөн, өйрәнеүең — үҙең өсөн» тип кенә ебәрә. Ғәйнеленә лә әйтеп ҡуйҙы:

— Быға ярарлыҡ эш юҡмы ни колхозда — ҡуш тырмаға, бесән йыйырға, күбә тарттырып, ат башында йөрөрлөк сағы лаһа.

Бригадир, бер туғаны тип тормай, ҡояш менән бергә күҙ тырнатып уята ла, алып китә яланға. Ҡайтҡас та тынғы юҡ, ағай-апайҙарының үҙ хужалығы, йорттағы ҡатын-ҡыҙ эше лә күп ваҡыт Фәтҡел елкәһенә төшә, китапҡа йәбешергә тамсы ваҡыт ҡалмай. Шулай булғас, уҡыу — төнгөлөккә. Өйҙәгеләрҙең тынысланып әүен баҙарына китеүен көтә лә, етеле шәмде яндырып, сүгәләй бер мөйөшкә. Белмәç һиңә әсә кеше балаһының ни эшләгәнен, күҙе йомоҡ — күңеле асыҡ, уҡыһын был, тигәндәй, оҙаҡ өндәшмәй ята ла, иçкәртә башлай:

— Етер инде, улым, ял ит, шәмдең кәрәсинен бөтөрәһең.

Тыңлаусан Фәткел, әсә әйткән — аҡылға, атай ҡушҡан — таҫылға, тип, күңеленә һеңдереп бара.

Фәткел күрше ауылға йөрөп уҡыны, үҙҙәрендә дүрт кластан ары мәктәп юҡ ине әле. Таң менән китә был, ҡарҙы шығыр-шығыр шығырлатып. Барыр-ҡайтыр юлға ғына ла нисәмә сәғәт ваҡыт үтә. Көҙөн — ҡара һыуыҡ, ҡышын — өйөрмә буран, яҙын — ташҡын тип тормай, китергә кәрәк мәктәпкә ҡарап уҡталып. Ташлаусылар ҙа байтаҡ булды уҡыуын, ә Фәткелде тартты ла торҙо үҙенә мәктәп. Яҡшы уҡыны ул, хәйлә-шаянлыҡты ят итте. Илке-һалҡы йөрөгәндәр төрттөрөп тә алғылай:

— Уҡып мулла, суҡып ҡарға булырға уйлаған кеше һиндер инде ул...

Ундай юҡ-бар һүҙҙәрҙе ҡолағына ла элмәй малай, хатта бәхәсләшеп, иҫбатлап та маташмай. Үҙ хыялында һаман.

Ете класты тамамлағас, белем саҡырған юлдар өҙөлдө. Артабанғы мәктәп бигерәк алыҫта ине. Берәй ҡасан уҡыу мөмкинлеге тыуғас дауам итәсәгенә өмөт тотоп, ауылда ҡалырға ҡарар итте. Уны ауыл советына сәркәтиплеккә саҡырҙылар. Бына ошонда ул тормош менән яҡыныраҡ танышты. Кемдәр генә ишек шаҡымай бында: һәр береһенең үҙ көйләнеше, үҙ талаптары. Көн итмеш ҡанундарын боҙғандарҙы яуапҡа тарттырыуҙы һорағандар ҙа, ялыу яҙғандар ҙа, бер-береһе менән ыҙғышҡандар ҙа етерлек. Һәр береһен тыңларға, документ әҙерләргә тейешһең. Сара күреү юлдарын эҙләйһең. Тынғыһыҙ эшкә башы-тояғы менән күмелде Фәткел. Төнгә саҡлы ултыра ҡай саҡ. Китап аша түгел, эсендә ҡайнап төйнәне ул тормош һабаҡтарын.

Егет кеше бит инде, күңелдең елкенгән сағы, киске уйындарға ла сыҡҡыһы килеп китә. Ауылдарында уйындар шәп булыр ине. Сатра буйындағы сиҙәмлектә гармун тауыштары, уйын-көлкө, моңло йырҙар, таҡмаҡтар әллә ҡайҙарға тарала. Фәткел дә бер нисә тапҡыр һуғылды Сатраға. Күңелле, әлбиттә, ҡыҙҙар күбәләк кеүек елпенә, егеттәр юрға һымаҡ тыпыр-тыпыр килә түңәрәктә. Бер ҡыҙ, осоп-ҡунып, Фәткелде лә әйҙәләне. Дәртләнеп төшкәйне лә түңәрәккә егет, ләкин аяҡтары тыңламаны, килешһеҙ генә арлы-бирле баҫты ла сыҡты. Теге ҡыҙ үпкәләп, ҡырын ҡарап үтте.

— Абау, ни ҡыланышың был, мин баҫҡан өсөн бейемәнеңме?..

— Бейей белмәгәс, нишләйем һуң, үпкәләмә инде.

— Хәйләләшмә, мәктәптә уҡығанда бейегәнеңде күргәнем бар ине ләһә, эреләндем, нәчәлникмен тиң дә ҡуй.

— Юҡсы, ниндәй начальник мин, ябай бер кешемен.

Ҡыҙға был да оҡшаманы, иренен ҡабартып торһайҙы ла, таҡмаҡ көйө ыңғайына түңәрәккә яңғыҙ төшөп өйөрөлдө.

Был ҡыҙ үҙҙәренең урамында йәшәгән Зөһрә ине. Осрағанда йылмая биреп, төртмә телләнеп китер ине быға са ла. Саялығы ла бар, һылыулығы ла, әммә баҫалҡы егет бер ҙә иркенләп һөйләшергә ҡыймай ҙа ҡуя. Бәлки, һүҙҙәре лә берегер ине лә...

Барыбер күңеленә уйылғанын әйтә алмай ҡалды Фәткел, эше менән ҡайнап ғүмер аҡты ла аҡты. Инде бына хеҙмәткә саҡырған ҡағыҙ ҙа ебәргәндәр.

Армияға оҙатҡанда күп кенә йәштәр йыйылғайны. Урамда, сиҙәмлектәге һымаҡ, уйын да ҡороп ебәрҙеләр, ауылда ғәҙәт шундайыраҡ. Гармунсы эҙләп йөрөйһө түгел, унының үҙҙәрендә, Кәшбел ҡустыһы өҙҙөрә генә. Бейеүселәр араһынан күҙ талдырып Зөһрәне эҙләне Фәткел. Ә ул юҡ та юҡ. Фәткелдең уға йылы ғына һүҙҙәр әйтеп хушлашҡыһы килгәйне. Кем белә донъя хәлен, ҡасан тағы әйләнеп ҡайтыр?.. Хушлаша алманы шул үпкәсел ҡыҙыҡай менән. Юлға ҡуҙғалыр ваҡыт етте. Аттар, елдереп, урамды бер әйләнде лә ҡалҡыулыҡҡа күтәрелә башланы. Шул тирәне әкренерәк үтергә тип, пар аттың ярһыуын баҫып, дилбегә тартты күсерҙә барыусы йәш егет. Фәткел, ауылдың матурлығын күңел көҙгөһөндә сағылдырырға уйлапмы, тирә-яҡты байҡай. Тегендәрәк, ҡалҡыулыҡ итәгендә, берәүҙең яулыҡ болғағаны күҙгә салынды. Ҡустыһы Кәшбел дә, сеңләп илағанға оҡшатып, гармунының күреген йыйҙы. Ул да иғтибар итте яулыҡ болғаусыға.

— Зөһрә бит был, әйтәм, күренмәне урамдағы бейеш-көлөштә.

— Юҡ ине шул, — тигән булды Фәткел, үкенесле рәүештә.

— Әллә хушлашаһыңмы, Фәткел, атты борам шунда, кәрәкһә, — тип ҡушылды күсер егет тә.

— Хушлаш, ағай, улай килешмәҫ бит. — Өндәне Кәшбел.

Башын ҡырын һала биреп, яурын ҡаҡты Фәткел. Аттар ҡалҡыулыҡҡа табан үрләне. Етер-етмәҫтән Кәшбел туҡтарға ҡушты күсер егеткә.

— Бар, ағай, үҙең генә хушлаш, беҙ ауылда ҡалаһы кеше, — тип, Кәшбел ағаһының еңенән тартты.

Фәткел өсөн үҙе генә барып хушлашыуы йәтешерәк тә. Йә, абайламай, саялығына бирелеп, әллә ни әйтеп һалыр ҡыҙ. Былай белмәмеш тә күрмәмеш, ишетеүсе булмаҫ.

Егет яҡынлашҡан һайын, Зөһрә кескәй сауҡалыҡ эсенәрәк тартылды. Ышыҡланыбыраҡ тороуҙы хуп күргәндер, ахырыһы. Кәйефле генә йылмайып, алдына баҫты Фәткел.

— Хәйерле көн, Зөһрә!

— Һаумы, һалдат!..— Бер аҙ тотлоғоп өҫтәне ҡыҙ. — Хәйерлеме икән, хәйерһеҙме әллә, кемгә нисектер...

— Бәй, нишләп хәйерһеҙ булһын ул, һалдатҡа алыныу үҙе үк бәхет бит! — тип төҙәтмәксе итте ҡыҙҙың һүҙен Фәткел.

— Һин киткәс урам бушап ҡалыр һымаҡ, эшкә барыуыңды ҡарашым менән оҙата инем көн дә...

— Шулаймы?.. Мин дә һинең матур бейеүҙәреңде һағынырмын һымаҡ.

— Һымаҡ ҡына... Ә мин ысынлап һөйләшкән булам тағы.

— Ғәфү ит, Зөһрә, һағынырмын, әлбиттә. Йәнһеҙ генә һағынмаҫ тыуған ерен, уның кешеләрен, ҡыҙҙарын... Һине...

— Иҫән-һау әйләнеп ҡайт, Фәткел, тотҡарланым, буғай, — тине лә егеттең күкрәгенә башын терәне Зөһрә.

Күпмелер шулай торғандан һуң, күлдәгенең еңе эсенән сәскә сигелгән ҡулъяулыҡ сығарҙы ҡыҙ.

— Иҫтәлеккә бәләкәй генә бүләгем һиңә, — тип егеткә һондо.

— О-о, иҫтәлектең дә ниндәйе бит! Быға са миңә бер кем дә ҡулъяулыҡ бүләк иткәне юҡ ине әле... — Әҫәрләнде егет, бик тә ҡәнәғәт рәүештә.

Ҡулға-ҡул тотошһалар ҙа, үбергә ҡыйманы егет. Ҡыҙ ҙа ымһынманы, баҫалҡылыҡтары еңде. Артына әйләнеп ҡарай-ҡарай, Фәткел ырандаҫҡа ултырҙы. Ҡыҙ күҙҙән юғалғансы ҡул болғаштылар. Егет күңелен юҡһыныу, ниндәйҙер бушлыҡ биләп алды. Кәшбел дә һиҙенеп, һорап ҡуйҙы:

— Йөрөй инегеҙме ни, ағай? Бер ҙә тойолған һымаҡ түгел ине.

— Йөрөргә өлгөрмәнек... Хәҙер күңелемдән сыҡмаясаҡ ул...

Фәтҡелғилем Һарытау ҡалаһы янында урынлашҡан уҡсылар полкына барып эләгә. Һалдат хеҙмәте ауыр инде ул, ләкин уны еңә белергә кәрәк. Тынғыһыҙ көндәр, йоҡоһоҙ төндәр үткәргән саҡтар ҙа күп. Хәрби әҙерлек күнекмәләре ниндәй сүрәткә алып инмәй: «дошманды» ҡыуып атакаға ла күтәреләһең, разведкаға барып, «тел» дә ҡулға төшөргән ваҡыттар етерлек. Күкрәк менән ҡар йырыуҙар, окоп ҡаҙып, ергә йылышыуҙар, сәпкә атып селпәрәмә килтереүҙәр, һаҡта тороуҙар бихисап ул һалдат тормошонда. Һалдат ана шулай сыныға, сослоҡҡа, таҫыллыҡҡа өйрәнә. Әле илдә тыныслыҡ хөкөм һөрһә лә, кем белә, дошман да бит йоҡламай.

Фәткел ученье ваҡыттарында ла һынатманы, төрлө көтөлмәгән шарттарға осрағанда зирәклеге арҡаһында юғалып ҡалманы. Яҙҙың матур бер миҙгелендә әллә күпме подразделениелар ҡатнашлығында киң ученье үткәрелде. Ысын һуғыш барышы тип торорһоң: самолеттар өйөрөлөп-өйөрөлөп оса, танктар ер һелкетә, пулемет, автоматтарҙың пуля сәсеүҙәре туҡталмай. «Һуғыш» тынған арала мөһим объекттарға, юлдарға һаҡсылар ҡуйыла: йәнәһе, «дошман» разведкаһы, йәиһә диверсанттары үтеп инмәһен. Фронт һыҙығына яҡын юлға һаҡҡа Фәтҡелде беркеттеләр. Ҡыуаҡтар араһына ышыҡланып тора бирә һалдат. Бер ниндәй ҡуҙҡыныс янамай, тып-тыныс. Уйҙарға бирелеп китте һаҡсы Латипов. Ауылын иҫенә төшөрҙө. Ҡыйҙаш буйҙарын буйланы, әсәһен, туғандарын күҙ алдына баҫтырҙы. Был минутта улар ниҙәр генә эшләй икән? Эх, әкиәттәге шикелле, ҡөҙрәт табып, бер тигәнсе осоп ҡайт та, әйләнеп кил ине! Күрер инең барыһын да, хәлдәрен белер инең. Һағыныуы еткәйне шул егеттең. Ҡалҡыулыҡта яулыҡ болғап һаман да Зөһрә торғандай. Ҡыҙ бүләген кер төшөрмәй һаҡлап йөрөтә егет гимнастеркаһының түш кеҫәһендә, ҡәҙерле аманат һымаҡ, өр-яңы көйө. Хеҙмәтен тултырып ҡайтҡас күрһәтер әле үҙенә бүләген.

Түшен ҡапшап ҡуйҙы һалдат: бында, һул кесәһендә, йөрәген йылытҡандай, йомшаҡ булып ята. Ҡулъяулығын тартып сығарып, ҡыҙҙың күҙ нурын түгеп сиккән сәскәһенә ҡарап, күңел йыуатмаҡсы ине лә, был яҡҡа табан машина килгәне күҙгә салынды. Автоматын әҙер тотоп, юл уртаһына сығып баҫты. «Тел» алырға уйлаһалар, өмөтләнмәһендәр, көс етерлек, һуғыш алымдарын беләйәк, бер нисәүһенә лә бирешмәҫ.

Машина шәп тиҙлектә килә бирә, әйтерһең, бында һаҡсы тормай, иғтибар ҙа итмәйҙәр. Аралар яҡынайҙы, ҡулын күтәрҙе һаҡсы.

— Пароль! — тип ҡысҡырҙы.

Машина тәҙрәһенән баш тығып ҡараны офицер.

— Танымайһыңмы ни беҙҙе? — тип кенә яуапланы.

Машина тағы килә башланы. Шул саҡ һаҡсы шартлатып һауаға атты ла ебәрҙе. Артынса уҡ автоматын тегеләргә тоҫҡаны.

Машина туҡтаны, ике полковник килеп төштө. Абына-һөрлөгә йүгереп, рота командиры капитан Андющак килеп етте. Тотлоға-тотлоға, украин акценты менән рапорт бирҙе. Юғары чинлы офицерҙарҙы күргәс, айырыуса ҡаушаны капитан: «с» өнө урынына «ç» өнөн әйтеп ебәрә. Полковник, ҡул һелтәп, саҡ туҡтатты уны. Һаҡсы янына килде икеһе лә.

— Фамилияң нисек һинең, һалдат?

— Рядовой Латипов, иптәш полковник.

— Нисәнсе йыл хеҙмәт итәһең?

— Йыл тулып килә.

Полковник блокнотына ниҙер яҙып ҡуйҙы.

— Молодец! — Офицер һалдаттың арҡаһынан һөйҙө. — Уставты яҡшы беләһең. Шундай уяу һалдаттар кәрәк беҙгә.

Унан һаман да сикәһенән ҡулын төшөрмәй бағаналай ҡатҡан капитанға боролдо.

— Минең исемдән һалдатҡа рәхмәт белдерегеҙ! — тине лә китеп барҙы полковник.

Улар киткәс кенә капитан иҫенә килде, буғай.

— Был бит беҙҙең дивизияның штаб начальнигы, ә һин, алйот, уны туҡтатырға баҙнат иткәнһең.

— Уставта бит полковниктарҙы туҡтатырға ярамай тигән пункт юҡ, иптәш капитан. — Ҡыйыу яуапланы Латипов.

Капитан үҙенең яңылыш иҫкәрмә яһауын аңлап алды, күрәһең.

— Һин ысынлап та молодец һалдат булып сыҡтың әле, — тип телен йомшартты.

Ай самаһы барған учеңенан бер түгел, ике рәхмәт алып ҡайтты Латипов Фәткелғилем. Икенсеһе — хәрби оҫталығы өсөн ине. Рәхмәттәрҙе полк теҙелгән саф алдында иғлан иттеләр.

Ошо ваҡиғанан ике-өс ай ҙа үтмәне, Латиповты кесе командирҙар әҙерләгән полк мәктәбенә уҡырға ебәрҙеләр. Унан, кесе сержант званиеһы биреп, уҡыған мәктәбендә ҡалдырҙылар. Башта отделениеға командир иттеләр. Артабанғы хеҙмәте барышында сержант, өлкән сер-

жант погондары таҡтылар. Уға армиянан ҡайтыр ваҡыт та еткәйне инде. Приказ көтөп йөрөгәндә, штабҡа саҡырҙылар. Инһә, теге саҡта автоматтан атып туҡтатҡан полковник та ултыра. Фәткел уны шундуҡ таныны, ундай кеше онотоламы һуң? Ул да иғтибар менән ҡараны өлкән сержантҡа.

— Беҙ һинең менән осрашҡайныҡ түгелме әле?

— Так точно, осрашҡайныҡ, — тип шартлатып яуап бирҙе өлкән сержант.

— Ҡайҙа булды әле ул?

— Ученье ваҡытында, иптәш полковник. — Фәткел йылын әйтеп бирҙе. Юлда һаҡта торғанда, тип тә өҫтәй башлағайны, йылмайып ебәрҙе офицер.

— Хәтеремдә. Унһын һөйләмәһәң дә ярар, мөһим түгел. Мөһимерәк һөйләшеү бар.

Полковник ҡыҫҡаса ғына илдәге хәлдәрҙе аңлатты.

— Ватанға ҡурҡыныс янай. Фашистар Польшаны баҫып алған, беҙҙең сик һыҙығына яҡынлашҡан... Дөрөҫ, һеҙҙең хеҙмәт срогығыҙ тамамланған, кеше хоҡуғын боҙа алмайбыҙ, ҡайтарып ебәрергә тейешбеҙ. Ләкин... Ләкин ил алдындағы бурыстың бер ваҡытта ла срогы сыҡмай. Шуға ла хеҙмәтегеҙҙе сроктан тыш дауам итеүегеҙҙе теләр инек. — Полковник күҙендә ялбарыу ҙа, өмөт тә саткылары сағылып үткәндәй.

Фәткел, нисек яуап бирергә, тигәндәй, аҙға ғына тотҡарланып ҡалды. Йөрәк берҙе ҡуша, аҡыл икенсене уйлай. Аҡыл ҡушыуын ҡабатланы өлкән сержант:

— Беҙ — Ватан һаҡсылары, илгә кәрәкбеҙ икән, хеҙмәтте дауам итергә әҙербеҙ, — тине башын күтәрә биреп.

Полковник та аяғөҫтө баҫып ҡул бирҙе уға.

— Шуны көткәйнем дә, иптәш өлкән сержант. Һинең кеүек егеттәр менән илде йәшәтеп була... — Алдында ятҡан исемлеккә ҡарап алды. — Латипов Фәткелғилем Мөхәмәтшакировичты үҙ ротаһына старшина итеп билдәләгеҙ, — тигән әмерен белдерҙе.

Званиеһын старшинаға күтәреп, уға яңы бурыстар йөкмәттеләр. Старшина Латипов хәҙер рота командирының уң ҡулына әйләнде. Роталағы взводтарҙың хәрби-сәйәси әҙерлеген күтәреү мәсьәләләренә, казарманың бөхтә торошона, йыһаздарҙың төҙөклөгөнә, курсанттарҙы ҡорал, кейем-һалым менән тәьмин итеү сараларына яуаплы, ҡыҫҡаһы, ошондағы тормоштоң бөтә булмышын ҡулында тотҡан кесе командирҙар сафына баҫты. Бигерәк тә ул курсанттарға бирелгән ҡоралдарҙың таҙалығына, кейем-һалымдың етеш булыуына күп иғтибар бүлде. Кем белә алдағыһын, әле тыныс, бер-ике сәғәттән тревога менән аяҡҡа баҫтырыуҙары ихтимал. Тревога ул колхоз бригадирының эшкә өндәшеүе түгел, әҙерләнермен дә барырмын, тип ҡалып булмай, сафҡа баҫыу өсөн һалдатҡа бер нисә минут ҡына бүленгән. Һәр ваҡыт уяу, һәр ваҡыт әҙер

булырға тейеш хәрбиҙәр. Ошо әҙерлек өсөн рота старшинаһы ла яуап бирә.

Бер нисә тапҡыр, йәш курсанттар йоҡоға талғас, старшина Латипов «подъем» менән күтәрҙе. Был команданы кем нисегерәк үтәй ала икәнен тикшерҙе. Взвод командирының ярҙамсылары, отделение командирҙары курсанттарҙы теҙеп тә ҡуйҙы. Ваҡытҡа өлгәшмәгәндәр ҙә күренде арала, 15-20 секундты кисерҙе старшина, шелтәләп маташманы. Карауаттарҙың нисек йыйыштырылыуын да ҡарап сыҡтылар. Берәүһененең өҫтөнә одеялы арлы-бирле генә ҡапланған. Саф алдына килеп, Латипов карауат хужаһына өндәште:

— Теньков, өс аҙым алға!

Бер кем яуап бирмәне, сыҡманы ла.

— Ҡайҙа Теньков? — Отделение командирынан һораны.

— Бында ине йоҡларға ятҡанда.

Эҙләргә керештеләр, юҡ бер ҡайҙа ла.

Старшина карауат матрасын күтәреп ҡарамаҡсы. Йыйыштырыуының да йүн-юҫығы юҡ, шунда йәшенмәгәнме? Матрасын әйләндерһә, карауат аҫтында, күҙен бәзләйтеп, Теньков ята. Сыҡмай ҡайҙа китһен, саф алдына баҫтырҙылар.

Старшина һорау бирҙе:

— Ниңә улай иттең әле, Теньков?

— Кейенеп өлгөрә алманым, иптәш старшина.

— Шуға йәшендеңме?

— Йәшендем шул, сираттан тыш наряд алғым килмәй.

Курсанттар геүләшеп көлөштө. Күп һөйләшеп бармаған, һәр ваҡыт етди төҫ һаҡлаған старшина ла йылмайҙы хатта.

— Бының өсөн наряд эләкмәҫ тип уйлайһыңмы?

— Эләгергә тейеш түгел, киреһенсә... Был — һалдаттың тапҡырлығын, ниндәй хәлдә лә юғалып ҡалмағанлығын күрһәтә. Үҙегеҙ шулай өйрәтәһегеҙ бит.

Тағы саф буйлап хихылдауҙар таралды.

— Әгәр дошман һөжүме башланып, боевой тревога иғлан ителһә, унда ла йәшенеп ҡалыр инеңме?

— Юҡ, иптәш старшина, ул саҡ кейемдәрҙе йөкмәп, кальсондан булһа ла сығып йүгерер инем. — Һәр һорауға яуап әҙер Теньковтың.

Старшина уға бер ниндәй ҙә яза бирмәне. Үҙе йәш, әммә һалдат бутҡаһын күп ашаған егет Теньков. Бала көйө бер ҡарауһыҙ етем ҡалғанын, полк тирәһенә һыйынып, һалдаттар менән тамаҡ туйҙырып йөрөгәнен, музыка взводына «полк улы» итеп алынып, барабан һуғырға өйрәнеүен, унан командир булам тип, уҡырға ебәреүҙәрен һорауын ишеткәне бар ине инде Латиповтың. Бер нәмәгә артыҡ бошонмай, хәйләкәр, тапҡыр, уйынсаҡ күңелле ине ул. Бына шундай хәлдәр ҙә булғыланы.

Боевой тревогалар, бер төнлөк, бер нисә көнлөк учениялар йышая төштө. Бөтә йәһәттән дә хәрби әҙерлек йылдам бара. Шул саҡтарҙа

ротаның әҙерлеген күп ваҡыт яҡшыға баһаланылар. Бөтә подразделениелар ҙа, бына-бына поход башланыуын көтөп, уяулыҡҡа өйрәнде. Һиҫкәндергән ул көн килеп етте. Фашист армияларының, көнбайыш сикте емереп, бер нисә сәғәт эсендә илебеҙгә әллә күпме саҡырым үтеп инеүҙәре билдәле булды...

Полк мәктәбе лә боевой төҫ алды. Бөтә хәрби йыһаз менән плацҡа ҡуйҙылар. Мәктәп менән етәкселек иткән полковник Орехов илдәге хәлде аңлатып сығыш яһаны. Алыҫ юлға маршҡа ташланыуҙы көтөп торғандарын әйтте.

Ләкин көткән марш кисектерелде. Мәктәптең тиҙләтелгән программа менән кесе командирҙар уҡытып сығарыуҙы дауам итәсәге беленде. Ул хәҙер курс тип кенә атала башланы. Ай үтеүгә берәүҙәр китә, икенселәре килә. Күп кенә офицерҙар, кесе командирҙар фронтҡа оҙатылды. Полковник Ореховты ла һуғышҡа инеүсе полктың командиры итеп тәғәйенләнеләр. Старшина Латипов ҡына һаман үҙ урынында, үҙ дәрәжәһендә ҡала килде. Уның яуаплылығы, эше бермә-бер артты хәҙер.

Фәткелғилем был тормош оҙаҡҡа бармаҫын һиҙенә ине инде. Ни тиһәң дә, ул хәрби сыныҡыу алған, тәжрибә туплаған. Фашистар Волга буйы ҡалаларына яҡынлашып килә, үлемесле һуғыштар бара. Дошманды Волга аша сығармаҫҡа тигән юғары командованиеның приказы хәрбиҙәргә иғлан ителгәйне инде. Гитлер армияһы бигерәк тә Сталинградты алыу өсөн теше-тырнағы менән йәбеште. Ҡаланы дошман ҡулына бирмәҫ өсөн туҡтауһыҙ яңы көс, өҫтәмә подразделениелар талап ителде. Курстағы тәжрибәлеләрҙе һуғышҡа оҙаттылар. Улар араһында старшина Фәткелғилем Латипов та бар ине. Был подразделение туп-тура ҡайнар һуғыш эсенә барып керҙе.

Китер алдынан Фәткелғилем әсәһенә ҡыҫҡа ғына хат оҙатты. Хаттағы иң мөһим яҙыу — һуғышҡа инәбеҙ, тигәнде белдереү ине. Уйланып ултырҙы ла, беренсе тапҡыр Зөһрәгә лә яҙмаҡсы булды. Хатында ул күпмелер тойғоларға ла бирелде: ҡулъяулығыңды күҙ ҡараһылай кер төшөрмәй һаҡлайым, ул миңә көс бирә, беҙ еңербеҙ, иҫән-һау әйләнеп ҡайтыр көн етер, алда беҙҙең һөйләшер һүҙебеҙ күп әле, тип теҙҙе.

Сталинградта фашист армияһын ҡамау бара. Дошманға төньяҡтан һөжүм иткән подразделениеларҙың береһенә ҡушылып, Латипов та ҡалаға килеп инде. Ҡала кесерәйтеп киткәндәй, айыу пыран-заран туҙҙырған ҡырмыҫҡа иләүенә оҡшаған. Ишелеп төшкән өйҙәр, урам уртаһында янып ултырған танктар, төрлө нығытмалар, йүгереп үткән һалдаттар, туҡтауһыҙ шартлау, атыу... Имәнес күренеш, хатта һөйләп аңлатыуы мөмкин түгел... Һәр урам, һәр йорт өсөн үлем менән күҙмә-күҙ осрашаһың. Фашистар тоҙаҡҡа эләккән йыртҡыс кеүек ҡотолоу юлдарын эҙләп, тегеләй-былай һуғыла-һуғыла ажарлана. Юҡ инде, ҡойроғона бер баҫҡас, зәһәр йыландың башын да сабып өҙөргә кәрәк. Башы иҫән ҡалһа, барыбер ағыуын сәсәсәк...

Ҡала урамы өсөн һуғыш ҡайнағандан-ҡайнаны. Автоматсы Фәткел Латипов төркөмө йорттарҙың тәҙрәләре аша ут яуҙырыу хәленә етте.

Бында хәҙер һин командир, һин старшина тигән бүленеш юҡ, бөтәһе лә илде азат итеүсе яугир. Ҡаршы яҡ йорттан фашист пулеметтан һиптерә. Нәҡ Фәткелдәр биләп алған йорт-позицияға тын алырға ирек бирмәй. Граната бәрер инең — алыҫыраҡ, етмәй шартлай. Артиллеристар йыраҡ позицияларға снарядтар яуҙыра. Нисек итеп күрәләтә кеше йәшәгән йортҡа пушка төҙәйһең, унда фашистмы, советтыҡымы — ҡайҙан беләһең. Урам һуғышында үҙ күсөңә ышанырға ғына ҡала...

Латиповтар биләгән йортта һуғышсылар ҙа һирәгәйә бара. Автомат автомат инде, пулемет кәрәк бында. Беҙҙекеләр яғынан яңы көс өҫтәлде. Пулеметсыһы ла бар. Латипов, дошмандар ҡайһы этаждарҙан ниндәй ҡоралдар менән атҡанын аңлатырға, боҫа-эйелә улар янына йүгерҙе. Берәүһенә туҡталды, ул командирға барырға ҡушты. Командиры пулеметсыға аңлатырға ҡушты. Тиҙ тапты пулеметсыны. Уныһы, өндәшеүгә, күҙ төбәп атып ятҡан еренән әйләнеп ҡараны. Ҡапыл телгә килде:

— Иптәш старшина!

— Теньков!

Улар ышыҡланып ҡына ҡул биреште, хәл һорашырға әмәл юҡ.

— Интектерҙе анау пулеметсы фашист, — тип теш ҡайраны Фәткел.

— Мин дә һис эләктерә алмайым: мин атһам, ул туҡтай, мин туҡтаһам, ул ата. — Теньковтың да асыуы ҡабарған.

— Һин бит тапҡыр кеше, Теньков, йүнен эҙлә. — Шаяртҡан булды Латипов.

— Уны граната менән генә алмаһаң, пулемет эләктерерлек түгел, — тине яуҙашы.

— Мин дә шулай уйлайым. Һин, Теньков, пулеметтан туҡтауһыҙ ат, боҫһон ул, күрмәһен, ә мин граната менән дөмөктөрәм сволочты! — Ярһыны Фәткелғилем.

— Һаҡ бул, иптәш старшина, ул йорттан автоматтар ҙа тыҡылдай.

— Ничего, Теньков, тәүәккәлләгән — таш ярған, уны нисек тә юҡ итергә инде, юғиһә, бер йорт өсөн көн буйы һуғышырғамы ни? Анау янған танкка ғына барып ышыҡланайым, бишенсе ҡатҡа ғына граната ташларлыҡ көсөм бар минең. Гранаталар тотоп, китергә йыйынды Латипов.

— Хуш хәҙергә, иптәш старшина!

— Хуш, Теньков!

Фәткел, айбар арыҫландай һикереп, янған танк яғына ташланды. Ҡаршы яҡтан автоматсы пуля һиптерҙе. Уны Теньковтың пулеметы тиҙ баҫтырҙы. Тағы бер-ике ырғыуҙан Фәткел танк артына сүгәләне, ҡулы менән Теньковҡа утты көсәйтергә ишараланы. Уңайлы ғына бер ваҡытта Фәткел ҡапыл ҡалҡынып аяғөҫтө баҫты ла аллы-артлы гранаталар тондорҙо. Теге пулеметсы фашист атҡан тәҙрәнән ут бөркөлгәне сағылып ҡалды күҙенә. Нәҡ уның тапҡырында ла дошман биләгән йорттан ырғытылған граната шартланы...

*(Аҙағы киләһе һанда)*